✓ ***Кешеләр Конфуцийҙың уҡыусыһына килгән дә: "Һин шундай аҡыллы һәм шул тиклем яҡшы һөйләйһең, мыжыҡ Конфуций кеүек түгел инде!" тигән. Быға уҡыусы шулай тип яуап биргән: "Аҡыл стена кеүек бит ул. Минең стена тәпәш һәм һеҙ уның артында нимә булғанын аныҡ ҡына күрә алаһығыҙ. Ә Конфуцийҙың стенаһы ныҡ бейек, уның артында нимәләр барлығын ҡарарға теләһәгеҙ, үҙегеҙ стена төҙөп ҡарағыҙ".***


ИЖТИМАҒИ-СӘЙӘСИ-МӘҘӘНИ ГӘЗИТ

# Киске Өфө

23 - 29 ИЮНЬ (ҺӨТАЙ) 2012 ЙЫЛ

kiskeufa.ru
blog.kiskeufa.ru

2002 йылдан башлап сыға

Һатыуҙа хаҡы ирекле

№25 (495)


## БЫЛ ҺАНДА УҠЫҒЫҘ:


"Башҡорт" тигән исемгә...

мәртәбә генә өҫтәнек



6

Ҡалалар бит лөғәттәрҙе ҡушып,



8-9 милләттәрҙән яһай винегреттар...

Рух азатлығы...

"Ҡош юлы"ның хакимы булды



11

Ауылда күңелһеҙ түгел,

егәрлегә шөғөлө лә күп



12

14 ТВ-программа


ӘЙТ, ТИҺӘГЕҘ...

## Һеҙ оло быуындың ниндәй принциптары менән ризаһығыҙ, ә ҡайһыларын кире ҡағаһығыҙ?

***Артур ИҘРИСОВ, эшҡыуар, 25 йәш:*** Оло һәм йәш быуын вәкилдәре араһында үҙ-ара мөнәсәбәт бер ваҡытта ла еңел булмаған. Һәр быуынға ла үҙ принциптары, ҡараштары һәм уй-фекерҙәре генә дөрөҫлөккә тап килгән кеүек тойола һәм бер-береһенә ошоларҙы көсләп тағырға тырышыу төрлө юҫыҡтағы конфликтҡа алып килә, минеңсә. Мәҫәлән, беҙҙең атай-әсәйҙәр СССР ваҡытында тәрбиәләнгән, шәхес булараҡ формалашҡан һәм, тәбиғи, уларға шул осор принциптарынан айырылыуы ауыр. Ә, бәлки, бөтөнләй мөмкин дә түгелдер. Улар әле булһа, мәҫәлән, шул замандағы "Бөтә халыҡтар ҙа бер-береһенә дуҫ һәм туған", тигән принциптан ҡотола алмай. Әлбиттә, мин төрлө халыҡтар араһында дошманлыҡ һәм күрә алмаусанлыҡ булырға тейеш, тигән фекерҙе яҡламайым, ләкин шул уҡ ваҡытта ололарҙың был иллюзияға ҡоролған принцибын ҡабул да итә алмайым, сөнки ул бөгөнгө көн күҙлегенән сығып ҡарағанда, дөрөҫлөккә тура килмәй. Шулай уҡ ололар йәштәрҙе тирә-яҡтағыларға эскерһеҙ ышанырға, тормош ниндәйҙер һынауҙар ҡуйғанда, туғандарға һәм дуҫтарға таянырға, тәү сиратта үҙеңә түгел, ә йәмғиәт ихтыяжына күберәк иғтибар бүлергә саҡыра, йәғни улар әле булһа дәүләттән нимәләр көтә. Минеңсә, бындай ҡараш хәҙерге заманда актуаль түгел һәм шуға күрә бөгөнгө йәштәрҙең тик үҙеңә ышанып, бер ҡайҙан бер нәмә көтмәҫкә, тигән принципты алға ҡуйып йәшәүе дөрөҫ. Бындай позиция кемгәлер ышанысты юғалтыуҙан ҡотҡара, сөнки буш өмөттәр бағланмай, бөгөнгөң һәм киләсәгең өсөн бары тик үҙең яуаплылыҡ тойоп йәшәйһең. Ә нимәләр килеп сыҡманы икән, үҙеңә үпкәләп булмай ҙа инде. Әлбиттә, яҡындарыңды тормошондан һыҙып ташларға ярамай, сөнки, нисек кенә булмаһын, кеше үҙ тамырҙары менән көслө, ләкин барыһы менән дә ниндәйҙер арауыҡ һаҡлау яҡшыраҡ, минеңсә.

***Гөлиә САФИНА, банк хеҙмәткәре, 22 йәш:*** Һәр быуындың ғына түгел, ә һәр айырым кешенең дә үҙ принциптары була һәм улар бер-береһенән ныҡ айырыла. Тирә-яҡтағыларҙың принцибын хөрмәт итеп, ләкин үҙеңдекенә тоғро ҡалып йәшәү кәрәк, тип уйлайым.

Шуға күрә, минеңсә, бында оло быуындың ниндәй принциптары менән ризаһығыҙ, ә ҡайһыларын кире ҡағаһығыҙ, тигән һорау урынлы түгелдер. Йәш быуын нисек кенә аҡыллы һәм үҙ аллы булып күренергә тырышмаһын, уларҙың һәр аҙымы һәм йәшәйеше ололарҙың тормошонан айырым була алмай, сөнки бөгөнгөгә нигеҙҙе нәҡ ололар һалған. Шул уҡ ваҡытта, һәр замандың үҙ заңы, 50-60 йыл элек актуаль булған принциптарҙың бөгөнгө йәшәйештә бөтөнләй урынһыҙ булыуы бар. Комсомол, партия йоғонтоһо аҫтында үҫкән һәм шәхес булараҡ формалашҡан кешеләрҙең уй-фекере, донъяуи принциптары бөгөнгө хөрриәт заманы йәштәренекенән ныҡ айырыла, тип әйтер инем. Бөгөнгө йәш быуынға иҫ китмәле азатлыҡ бирелгән һәм улар уны нисек ҡулланырға белмәй. Кемдер бер юлы бар донъяны ҡосорҙай булып, тиҙ янып һүнә, икенсеһе оҙайлы һайлауҙар алдында баш ватып, йәшлеген уҙғара, өсөнсөһө иһә урталыҡты таба алмай йонсой. Ә йәштәргә дөрөҫ юл күрһәтеүсе, тормошто аңлатыусы булырға тейешле оло быуын вәкилдәре үҙ заманында бындай иректе күрмәү сәбәпле, үҙ ролдәрен үтәй алмай аптырап ҡалды. Һәм был, ҡыҙғанысҡа күрә, ике быуынды үҙ-ара бәйләүсе ептең өҙөлөүенә килтерҙе: берәүҙәр үткән заман ҡалыптарынан арына алмай, икенселәр уларҙы ҡабул итергә теләмәй. Ә күсәгилешек булмаған, йәғни ололарҙың донъяуи тәжрибәһенә таянмаған йәштәр йәшәгән йәмғиәттең киләсәге хәүефле.

***Сәлим ХӘКИМОВ, ваҡытлыса эшһеҙ, 28 йәш:*** Минеңсә, бөгөн бик һирәктәр генә үҙ принциптарына тоғролоҡ һаҡлап йәшәй, ә күптәр ел ыңғайына бөгөлөп-һығылып тора. Ике йөҙлөлөк, ярамһаҡланыу, ҡурҡаҡлыҡ, кеше алдында бер төрлө, ә ул юҡта икенсе төрлө һөйләү - күптәрҙең йәшәйеш ҡағиҙәһенә әйләнде. Ундай кешеләрҙең ниндәй тормош принциптары булһын? Был ҡылыҡтар ололар араһында ғына түгел, беҙҙең быуын вәкилдәрендә лә бар. Ошондай кешеләрҙе ҡабул итә алмауым, улар араһында эшләй алмауым арҡаһында эштән китергә мәжбүр булдым. Ләкин быға һис тә үкенмәйем, сөнки ундай коллективта ҡалыуым үҙемдең принциптарыма хыянат итеү булыр ине. Ә мин быға юл ҡуя алмайым.

**Наҙгөл СӘФИУЛЛИНА яҙып алды.**

ИЛ-ЙОРТ ХӘБӘРЕ

# ИЛҺӨЙӘРЛЕК...

## йыйындарҙа ла тәрбиәләнә



**Ошо көндәрҙә Салауат районында район һабантуйы сиктәрендә "Салауат йыйыны" республика фольклор байрамы ла үтте. Уны тамаша ҡылырға республика Президенты Рөстәм Хәмитов һәм башҡа ҡунаҡтар ҙа килгәйне. Республикабыҙҙа төрлө күңел асыу саралары булып тора, ә бына "Салауат йыйыны" республика фольклор байрамы тәүҙән үк азатлыҡ рухын, батырлыҡ өлгөһөн, халыҡтар дуҫлығын сағылдырыусы сара булараҡ үткәрелә башлағайны һәм бер нисә йыл шулай дауам иткәйне. Әммә былтыр һәм быйыл ул район һабантуйы сиктәрендә генә үткәрелде, шулай булыуға ҡарамаҫтан, төрлө тарафтарҙан йыйылған төрлө милләт халыҡтары уны республика статусындағы сара булараҡ ҡабул итте, тамашаларҙы ҡыҙыҡһынып күҙәтте.**

Дауамы 16-сы биттә.

БАШ ЙОРТТА



# ҠАЛАНЫ МАҠТА ЛА...

## ауылда йәшә

**Гәзиттә шундай рубрика асылғас, форсаттан файҙаланып, үҙ фекерҙәремде яҙырға булдым. Хәҙер баш ҡаланы танырлыҡ та түгел, яңғыҙ йөрөһәң, аҙашырға ла күп кәрәкмәй.**

Элек беҙ йәш саҡта, нигеҙҙә, трамвайҙар пассажирҙар йөрөтөүҙең төп транспорты була торғайны. Ленин урамынан үтеп, Октябрь проспекты аша Черниковканы үҙәк менән тоташтыра ине улар. Ә хәҙер... Беҙҙең йәшлек транспорты булған трамвай линиялары кәмегәндән-кәмей, уның ҡарауы, еңел автомобилдәр һаны артҡандан-арта. Мәскәүҙең ниндәйҙер урамында тәүлек әйләнәһенә тығындар була, тигәндәренә иҫ китеп аптыраған булабыҙ. Баҡтиһәң, беҙҙең Өфө лә ҡалышмай икән. Әлегә тәүлек әйләнәһенә тығындар юҡ-юҡлыҡҡа, шулай ҙа берәй заман республиканың баш ҡалаһында ла автомобилселәр саҡрымдарға һуҙылған сираттарҙа ҡояшта ҡыҙынып ултырмаҫ тип әйтеп булмай.

Әлбиттә, Өфө замандан ҡалышмай - матурайған, яңынан-яңы сағыу, күҙгә кеүек ялтырап торған биналар төҙөлгән. Аҙым һайын супер- һәм мегамаркеттар. Ләкин ябай пенсияға көн күргән, осон-осҡа ялғаған ҡарт-ҡоро, аҙ эш хаҡына тир түгеүсе ябай эшсе уларҙың эсенә инеп, берәй нәмә алып сығамы икән? Әллә киноларҙа күрһәтелгәнсә, ундайҙар барып инеүгә, һатыусылар ытырғанып йөҙ борамы икән? Минеңсә, күпселек өсөн бындай ялтырауыҡ магазиндар хәҙер музей кеүек ҡабул ителә.

Халҡы миллиондан ашҡан баш ҡаланың, бәлки, үҫеш кимәле шундай ялтырауыҡлы биналар менән билдәләнәлер, әммә улар урынына күберәк балалар баҡсалары, балалар майҙансыҡтары төҙөлһә, минеңсә, яҡшыраҡ булыр ине. Юҡһа, тиҙҙән хатта йорт алдарында балаларға уйнарға майҙансыҡтар ҡалмаҫ, уларҙы төрлө сит ил маркалы машиналар баҫып алыр кеүек.

Эйе, баш ҡала ныҡ үҙгәргән, урамда кешенең икенсе кешелә эше лә юҡ. Һәр кем ҡайҙалыр ашыға, ҡабалана, арыған, йонсоған йөҙҙәр. Кәйефһеҙ кешеләр ағымы... Йәшлек эҙҙәрен эҙләп килһәң дә, табырлыҡ та, танырлыҡ та түгел. Юҡ, кәрәкмәй минә ҡалағыҙ, ҡаланы маҡта ла, ауылда йәшә, тип юҡҡа ғына әйтмәгәндәрҙер. Йәшлек эҙҙәремде эҙләп киләм дә, ауылымды һағынып ҡайтам...

**Шәрифә СИБӘҒӘТОВА.**

"КИСКЕ ӨФӨ"ГӘ - 10 ЙЫЛ!

# БЫЛ БАҪМАҺЫҘ ЙӘШӘҮ...

## рухи аҙыҡһыҙ йәшәү ул

**"Киске Өфө" гәзите уҡытыусылар өсөн алыштырғыһыҙ ярҙамсы әсбап, үҙенсәлекле мәғлүмәт сығанағы. Башҡорт теле уҡытыусыһы өсөн генә түгел, башҡа предметтарҙан уҡытыусылар ҙа, класс етәкселәре лә уның баһаһын, кәрәклеген белә, уның аҡылын, уның мәғлүмәтен дәрестәрендә файҙалана. Әммә шуныһы ла ғәжәп: был баҫманы йәштәр, балалар ҙа яратып уҡый бит.**

Үҙем гәзитте бер-нисә йыл рәттән алдырам һәм лицейҙың башҡорт теле кабинетында йыйып барам. Тәнәфескә ҡыңғырау шылтырау менән балалар кабинетҡа инеп, тәү сиратта "Киске Өфө"нө ҡулдарына ала. Мин уларҙың гәзитте иң һуңғы битенән уҡый башлауына гел иғтибар итәм.

Балалар иң тәүҙә "Аҡыл - ҡаҙна" рубрикаһындағы аҡыллы һүҙҙәрҙе, фәһемле риүәйәттәрҙе уҡый, шунан гәзиттең башҡа биттәрендәге мәҡәләләрҙе уҡып сығалар, ҡайһы бер темалар буйынса бер-береһе менән бәхәсләшеп тә алалар. Бәхәстең осона сыға алмаһалар, мине лә үҙҙәренең һөйләшеүенә йәлеп итәләр. Уҡыусыларҙың шундай холҡон белгәс, үҙем гәзитте өйгә килеү менән уҡып сығырға, балаларҙың бәхәсендә ҡатнашырға әҙер булырға тырышам. "Киске Өфө" кеүек һәр кемде уйландырыусы һәм милли үҙаңыбыҙҙы үҫтереүсе гәзит булыуына шатланып бөтә алмайым. Уны белмәүселәр, уҡымаусылар ҡалай күп мәғлүмәттән, рухи аҙыҡтан, тормош йәменән мәхрүм, тип уйлап ҡуям. Был баҫманы бөтә өлкәлә эшләүселәр ҙә алдырып уҡыһын ине, тигән теләктә ҡалам.

**Гөлнәзирә ИГЛЕКОВА,**
**Сибай ҡалаһы "Ирәндек" лицейының башҡорт теле һәм әҙәбиәте уҡытыусыһы**



Сибай ҡалаһының башҡорт теле уҡытыусылары.

ИҒТИБАР!

# МӨХТӘРӘМ УҠЫУСЫЛАРЫБЫҘ!

**2012 йылдың икенсе яртыһында ла өйҙәрегеҙгә "Киске Өфө" гәзите килеүен, уның аша зиһенде ҡуҙғытыр, йөрәкте ярһытыр, рухты күтәрер, сәмгә ут һалыр мәғлүмәт алырға теләйһегеҙме? Улайһа, июнь айы бөткәнсе почтаға инеп, баҫмабыҙға яҙылыу мөҙҙәтен оҙайтырға онотоп ҡуймағыҙ.**



Июндә гәзитебеҙгә яҙылып, квитанцияларын редакциябыҙға ебәреүселәрҙе лә бүләктәр көтә: 3 кеше - башҡортса "Ҡөрьән-Кәрим" китабына, 3 кеше "400 башҡорт халыҡ йыры", 3 кеше Рауфан Мортазиндың "Космоэнергетика һәм сәләмәтлек", ҡалғандар иһә "Айыҡ туй сценарийҙары" китаптарына эйә буласаҡ.

● Квитанцияларығыҙ менән бергә **тыуған көндәрегеҙҙе** лә хәбәр итегеҙ. Гәзитебеҙ аша уҡыусыларыбыҙҙы тыуған көнө менән ҡотлау - беҙгә лә мәртәбә, һеҙгә лә шатлыҡ өҫтөнә шатлыҡ өҫтәр.

● **"Киске Өфө" - бүләгем"** акцияһы ла дауам итә. Уға ҡушылып, ауылдарҙағы туғандарығыҙға, ата-әсәйҙәргә, мәсеттәргә, таныштарығыҙға гәзитебеҙҙе яҙҙырып шатландырығыҙ.

**Өфөлә йәшәүселәр өсөн гәзитебеҙгә яҙылыуҙың тағы шундай юлдары бар:**

● Йәшәгән йортоғоҙ эргәһендәге "Өфө-матбуғат" киоскыһында 6 айға **270 һумға** яҙыла алаһығыҙ - почта йәшниге юҡ, тип һылтанырға ла кәрәкмәй, аҙнаһына бер тапҡыр шәмбе көндө ошо киоскынан ғына сығаһығыҙ ҙа алаһығыҙ.

● Коллективығыҙ менән яҙылһағыҙ (кәмендә 10 дана), редакция гәзитте эшләгән урынығыҙға үҙе килтереп бирә - шулай уҡ уңайлы ла, арзанға ла тура килә: ярты йылға **234 һум**.

● Яҡын йәшәгәндәр редакциябыҙҙа яҙылып, аҙна һайын үҙе килеп алып йөрөй ала: ярты йылға **240 һум**.

**"Киске Өфө"нөң индексы - 50665. 2012 йылдың икенсе яртыһына яҙылыу хаҡы - 354 һум 24 тин.**

**Бергә булайыҡ, бергә-бергә фекер ҡорайыҡ, донъя хәтәрҙәрен, борсолоуҙарҙы бергә еңәйек, шатлыҡ-ҡыуаныстарҙы бергә уртаҡлашайыҡ!**

## Н И М Ә ? Ҡ А Й Ҙ А ? Ҡ А С А Н ?

✓Әхмәтзәки Вәлиди исемендәге Милли китапханала Башҡортостан яҙыусылары республика Президенты Рөстәм Хәмитов менән осрашты. Һүҙ оҫталарының төбәк башлығы менән рәсми булмаған бындай аралашыуы тәүгә үтте. Әҙиптәр Президентҡа үҙ проблемалары һәм пландары хаҡында һөйләне.

✓Башҡортостан Президенты Рөстәм Хәмитов Санкт-Петербургта үткән XVI Халыҡ-ара иҡтисади форумда ҡатнашты. Быйыл форум "Һөҙөмтәле лидерлыҡ" девизы аҫтында үтте. Глобаль көрсөктөң яңы тулҡынын булдырмау, финанс секторҙы көйләү - сараның төп темалары булды. Энергетик хәүефһеҙлек, шулай уҡ пенсия һәм социаль өлкәләрҙәге Рәсәй реформалары, эшлекле мөхитте яҡшыртыу, илдең Бөтә донъя сауҙа ойошмаһына инеүе мәсьәләләренә лә ҙур иғтибар бүленде.

✓Өфөлә V "Урал-Алтай: быуаттар аша - киләсәккә" Бөтә Рәсәй ғилми конференцияһы булып үтте, ул Рәсәй Фәндәр академияһы Өфө ғилми үҙәгенең Тарих, тел һәм әҙәбиәт институтына 80 йыл тулыуға арналды. Конференцияла ҡатнашыусылар Урал-Алтай төбәге халыҡтарының тел һәм тарих проблемаларын, шулай уҡ төбәктәге хәҙерге заман этносәйәси хәлде, этномәҙәни һәм этнотел процестарын тикшерҙе. Конференцияла Рәсәй Федерацияһы субъекттарынан, яҡын һәм алыҫ сит илдәрҙән ғалимдар ҡатнашты.

✓Башҡортостан Милли музейында "Әхмәтзәки Вәлиди Туған" китабы авторҙарын "ТӨРКСОЙ"ҙың почет билдәләре менән наградлау тантанаһы үтте. Наградаларҙы Өфөгә рәсми визит менән килгән ТӨРКСОЙ ойошмаһы генераль секретары Дюсен Касеинов тапшырҙы. Наградланыусылар араһында - "Халыҡ мәшғүллеге дәүләт хеҙмәте идаралығының уҡытыу үҙәге" директоры Тәлғәт Сәғитов, яҙыусы Ғәлим Хисамов, мөхәррир Ғәлиә Ғәлимова, китап дизайнеры, "Белая река" нәшриәте хеҙмәткәре Юрий Илингин һәм ғалим Салауат Ҡасимов бар.

✓Өфөгә рәсми визит менән килгән Халыҡ-ара төрки мәҙәниәте ойошмаһының (ТӨРКСОЙ) генераль секретары Дюсен Касеинов М. Аҡмулла исемендәге Башҡорт дәүләт педагогия университетында башҡорт филологияһы факультетында көнсығыш телдәре кабинетын асыу тантанаһында ҡатнашты. Шулай уҡ бында Халыҡ-ара төрки мәҙәниәте ойошмаһы (ТӨРКСОЙ) кафедраһы асыу мөмкинлеге лә тикшерелде. Уның төп маҡсаты - төрки халыҡтары мәҙәниәтен өйрәтеү һәм таратыу буласаҡ.

*МИЛЛИ ИДЕЯҒА ТОРОШ*

# ҮЛЕМДӘН ОЯТ КӨСЛӨ

**Туғандарым менән, яҡты донъя менән хушлашҡандай булып, каптерка ишеген асып инеүем булды, мине унда ярым ҡараңғылыҡ һәм танауға бәрелгән тәмле аш-һыу еҫе ҡаршыланы. Бәй, каптерканың уртаһында ишеккә ҡарай һуҙып ултыртылған тар ғына өҫтәл артында мәжлес бара, имеш. Дембелдәрҙе оҙатыу тантанаһына йыйылғандар икән. Табын өҫтәлендә юҡ нәмәнең үҙе юҡ: итле ризыҡтарҙан, йәшелсә-емештән өҫтәл һығылып тора, көньяҡ коньяктары ла күренә. Өҫтәл артында ултырыусы грузиндар, әрмәндәр, гагауздар, тажиктар, ҡаҙаҡтар, чечендар, әзербайжандар үҙ телдәрендә гәп һата. Миңә иғтибар итеүсе лә юҡ...**



Мин йәш һалдат булараҡ, әҙәп һаҡлайым. Индем дә ҡатып ҡалдым. Күҙ ҡырыйы менән генә ҡарайым: Вейсалов күренмәй, өҫтәлдең теге башында грузин егете Нарсия Эльдар ултыра, был яҡ башындағы урын буш. "Утябаев, ты в натуре мальчик что ли, садись, налейте ему, короче...", тип әйтеп һалмаһынмы миңә черпак Эльдар. Күңел йылынып китте, ә мин һуғышырға әҙерләнеп килгән булдым бит әле. Стакандағы көньяҡ эсемлеге тамаҡҡа инеп киткәс, эҫе була башланы хатта. Бер-икене ҡабып алдым. Бер минут самаһы ултырғас, артымда каптерканың ишеге асылып китеүен ишеттем. Күңелем менән һиҙәм - Вейсалов. Килеп инеүсе миңә арт яҡтан яҡынлап, ҡулын яурыныма ҡаты ғына итеп һалды ла: "А этот дух почему сел на мое место, когда старший по званию подходит, что делают?" - тине. Мин аяғыма баҫып, уға табан боролорға иттем. Минән дә алдараҡ Эльдар һикереп торҙо һәм ҡарсығa танауын алға төбәп, нәҙек оҙон кәүҙәһен эйеберәк, барыһын да һиҫкәндерерлек итеп: "Я всем говорю, короче, если хоть один волосок, короче, с головы Утябаева упадет, короче, тот будет иметь дело со мной, короче. Он же башкирский поэт, короче, что он потом будет писать о нас, короче. Вы же нацию свою позорите, короче. Вейсалов, найди себе место, короче, и садись, короче..." - тине ул барлыҡ Кавказ акценты ҡанундарына ярашлы итеп.

Бына шулай көтөлмәгән йүнәлеш алды Вейсалов менән минең ҡырҡыулашырға тейешле мөнәсәбәт. Дөрөҫөрәге, грузин егетенең урынлы-урынһыҙ "короче"лары менән тиҙ генә хәл ителде минең яҙмыш. Ел өрһә, ҡоларға әҙер торған сибек, әммә башҡаларға йоғонтоһо менән титаник ҡеүәткә эйә Нарсия менән бынан алда ла әңгәмәләшә торғайныҡ. Ул һәр осраҡта ла нисек итеп Өфөгә килеүе, ундағы нефть институтына һынау тотоп ҡарауы, әммә конкурстан үтә алмауын бәйән итә ине. Әммә Өфөлә булғаны, беҙҙең яҡты яҡшы белгәне өсөн генә ярҙамға килмәне Эльдар миңә. "Ты смог постоять за себя, короче, не побежал к офицерам. Вот из-за этого, короче, я уважаю тебя", тине ул миңә мәжлес һуңынан тәмәке көйрәтергә сыҡҡанда.

Һуңынан да Эльдар мине бер нисә тапҡыр төн уртаһында уятып, гарнизонда урынлашҡан хәрби частарҙың ашханаларына, каптеркаларына үҙенең яҡташтарына ҡунаҡҡа алып йөрөнө. Тик ул дембелгә ҡайтҡанда хушлаша алманым, сөнки уны Әзербайжандың Куткашен (хәҙер Габала ҡалаһы) тигән ҡасабаһына оҙайлы командировкаға киткән урындан ҡайтарғандар. Исмаһам, адресын да алмағанмын үҙенең.

Вейсалов менән дә мөнәсәбәтебеҙ көйләнде. Дөрөҫөрәге, мин үҙебеҙҙең хәрби частың строевой бүлегендә хеҙмәт иткәс, уға һуңынан институтҡа инер өсөн яҡшы характеристика кәрәк ине. "Ҡағыҙ күтәрә ул", тип, үҙен ергә төшөрмәй маҡтап яҙып бирҙем, үҙемсә бының менән "ғәйебемде" йомшартырға теләнем, буғай. Ул дембелгә киткәндә ҡосаҡлашып хушлаштыҡ, һәр хәлдә, ирҙәрсә аңлаштыҡ.

Хәҙер килеп, уйҙарым менән шул ваҡыттағы кисерештәремә кире әйләнеп ҡайтам да, үҙемде алъюҫыҡҡа рәнйетеүсегә ошо рәүешле итеп яуап биреүем менән, барыбер ҙә, дөрөҫ эшләгәнмен тип ҡуям. Мосолман дине мөхитендә үҫкән Вейсалов та үҙенсә дөрөҫ булғандыр, тием. Хатта ки, "Үлемдән оят көслө" тигән әйтемде уның ҡылығын аҡлар өсөн дә ҡулланырға булалыр. Моғайын, ул ғаиләһендә ныҡлы дини тәрбиә алғандыр һәм моғайын да, уның ғаилә принциптарында мосолманға тыйылған ризыҡты ҡабул итеү үлемдән дә көслө оят, хурлыҡ булып иҫәпләнгәндер һәм шуның өсөн дә ул аҙағы үҙе өсөн нимә менән барып бөтөрөн белмәгән аҙымға барғандыр, тим...

Ә мин иһә, бөгөн килеп, һәр быуат һайын тыуған еребеҙ, телебеҙ һәм динебеҙ өсөн үлемесле яуға күтәрелеп сығып, һуңғыһында танктарға ҡаршы һыбай килеш ҡылыс менән барған атай-олатайҙарыбыҙҙың кисерештәрен аңлаған кеүекмен. Әрмелә булһынмы, тормоштоң башҡа төрлө ҡапма-ҡаршылыҡлы һәм ҡатмарлы ваҡиғаларында минең кеүек хәлгә ҡалған бик күп милләттәштәремдең шундай саҡтағы кисерештәрен тыңлағанда ла бындай аңлауым тәрәнәйә бара. Дөрөҫ, хәҙерге прагматик заман күҙлегенән сығып, бындай фиҙаҡәрлекте һәм ҡаһарманлыҡты ахмаҡлыҡҡа һәм бер ҡатлылыҡҡа тиңләүселәр ҙә бар. Ундайҙар хатта үҙебеҙҙең арала ла күп. Әммә беҙ, беҙ генә түгел, Рәсәй составында дәүләтле булған күп кенә халыҡтар, үҙҙәренең бөгөнгө йәшәйеше менән тарихтағы, бигерәк тә XX быуат башындағы башҡорт ҡаһарманлығына бурыслы. Әлегә донъя йәмәғәтселеге был хәҡиҡәтте аңлаған хәлдә лә, белмәмешкә һалыша. Әммә донъялар ҙа, кешеләрҙең фекере лә үҙгәреп тора: ваҡыт үткән һайын тарихи ваҡиғалар аныҡыраҡ төҫмөрләнә. Шул уҡ ваҡытта күп кенә башҡорт күтәрелештәренең беҙгә ҡаршы көстәр тарафынан ойошторолған провокация булғанын да онотмайыҡ, тием. Әммә нисек кенә булмаһын, милләтебеҙ ҡаһармандары һәр ваҡыт үҙ асылына тоғро ҡалған: үлемдән оят көслө, хурлыҡтан үлем артыҡ, тип иҫәпләгән һәм беҙгә хәҙергене бүләк иткән.

Магнитогорск телестудияһында эшләгән саҡта ҡаланың "Магнитогорский рабочий" гәзитендә Александр Матросовтың Шакирйән Мөхәммәтйәнов булыуы хаҡында мәҡәлә баҫылғас, урыҫ милләтле хеҙмәттәшем: "Башҡорттар беҙҙең Матросовты ла үҙҙәренеке итергә тырыша", - тип дәғүәһен белдерҙе. Беҙ Фәтих Фазылов менән уға Рәүеф Насыровтың Матросов хаҡында яҙылған урыҫ телендәге китабын уҡыттыҡ. Китапта Мәскәүҙәге бойондороҡһоҙ экспертиза мәғлүмәттәре килтерелеп, унда Советтар Союзы Геройы Александр Матросовтың фотоһы менән Учалы районы Ҡунаҡбай ауылы егете Шакирйән Мөхәммәтйәновтың бер үк кеше булыуы хаҡында документаль раҫлама баҫылғайны. Хеҙмәттәш бындай дәлилде лә еңел ҡабул итте һәм: "Амбразураға шул башҡорт ҡына ташлана ала инде ул", - тип әйтеп ҡуйҙы. "Үлемдән оят көслө", "Хурлыҡтан үлем артыҡ" әйтемдәре үлем ҡурҡынысы алдында баҙап ҡалыуҙы ғына ла аңлатмайҙыр, тим. Уның нигеҙендә үҙеңде ни өсөндөр, кем өсөндөр ҡорбан итергә, йәнеңде фиҙа ҡылырға әҙер булыу ҙа ята. Үлемдең аръяғында Хаҡ Тәғәлә алдындағы һынау ҙа бар бит әле. Ҡурҡаҡлыҡтың хурлығы, ояты, кем белә, бәлки шул һынауҙа асыҡланалыр. Хәҙерге заман өсөн ябаҡлымы-түгелме, бындай тойғо беҙҙең ҡаныбыҙҙа йәшәй. Хәйер, мәшһүр шағирыбыҙ Шәйехзада Бабич был тойғобоҙ хаҡында үҙенең "Башҡортостан" шиғырында бик аныҡ итеп әйткән.

*Арыҫландар үҙ ерен*
*Залимдарҙан тапатмаҫ,*
*Таптаймын тип атлаһа,*
*Башҡорт ҡаны атлатмаҫ.*
*Ил өҫтөнә сапҡан яу*
*Башҡорт йәнен ҡаҡшатмаҫ,*
*Бысраҡ табан аҫтында*
*Башҡорт намыҫы ятмаҫ...*

**Әхмәр ҒҮМӘР-ҮТӘБАЙ.**
**(Аҙағы. Башы 24-се һанда).**

## Н И М Ә ? Ҡ А Й Ҙ А ? Ҡ А С А Н ?

✓ Өфөлә Башҡортостан Хөкүмәте менән "Рәсәй почтаһы" федераль дәүләт унитар предприятиеһы араһында республикала почта элемтәһен камиллаштырыу һәм үҫтереү өлкәһендә үҙ-ара килешеп эш итеү тураһындағы килешеүгә ҡул ҡуйылды. Республикала "Рәсәй почтаһы"ның 1300-ҙән ашыу бүлексәһе иҫәпләнә. Ул Башҡортостандағы ҙур предприятиеларҙың береһе булып тора, унда 10 меңдән ашыу кеше эшләй.

✓ Йыл башы менән сағыштырғанда Өфөлә эшкә урынлашыу кимәле күпкә күтәрелгән. Шулай итеп, әгәр 2012 йылдың 1 февраленә ҡарата мәғлүмәттәр буйынса Башҡортостан баш ҡалаһында был күрһәткес 60,5 процентҡа тиң булһа, июнь башында ул 79,1 процент тәшкил иткән. Йыл башынан алып Өфөнөң Халыҡ мәшғүллеге үҙәге йәмғеһе 8300-ҙән ашыу кешене эшкә урынлаштырған. Шундай уҡ ыңғай динамика Өфөлә эш эҙләүселәр һанының кәмеүендә лә күҙәтелә.

✓ Башҡортостан Президенты Рөстәм Хәмитов үҙенең Указы менән республиканың дәүләт учреждениелары хеҙмәткәрҙәренең эш хаҡы кимәлен күтәрҙе.1 июлдән оклад күләме, шулай уҡ профессиональ квалификацион төркөмдәр буйынса минималь окладтар билдәләү өсөн база берәмеге күләме 1,14 тапҡырға арта. Указ 1 июлдән үҙ көсөнә инә. Дөйөм белем биреү учреждениелары уҡытыусыларының эш хаҡын күтәреүгә ҡағылышлы положениелар иһә 2012 йылдың 1 сентябрендә үҙ көсөнә инә.

✓ "Урал аръяғы-2012.Тәбиғәт.Кеше.Мәҙәниәт" халыҡ-ара акцияһы сиктәрендә Рәсәй һәм сит ил рәссамдары ҡатнашлығында фототур үтте, тип хәбәр иттеләр Республика халыҡ ижады үҙәгенән. Турциянан рәссамдар Сыткы Фират, Ибраһим Демирель, Италия фоторәссамы Франческо Джорджио республиканы фотоаппарат объективы аша тәүге тапҡыр күрҙе. Маршрут Ҡырмыҫҡалы районынан башланды, фотографтар Бөрйән, Хәйбулла, Әбйәлил райондарында, Сибай ҡалаһында булды.

✓ Шамил Вәхитов Рәсәй Федерацияһының ауыл хужалығы министры урынбаҫары вазифаһынан бушатылды. РФ Хөкүмәтенең тейешле бойороғо дүшәмбе, 18 июндә, федераль норматив акттар банкында урынлаштырылды. Документҡа 13 июндә ҡул ҡуйылды.

**"Башинформ"дан.**

*ТӨРЛӨҺӨНӘН*

# ТАБИПТАР...

## ауылға китә

**Өфөлә тиҫтәнән ашыу муниципаль дауахана, утыҙҙан ашыу поликлиника эшләүенә ҡарамаҫтан, кадрҙар мәсьәләһе киҫкен тора. Баш ҡалабыҙ табиптарға ҙур ҡытлыҡ кисерә. Өфө медицина кадрҙары менән 54 процентҡа ғына тәьмин ителгән. Баш ҡалаға төрлө йүнәлештәге 250 табип талап ителә.**

Был хаҡта Өфө ҡала округы хакимиәтенең һаулыҡ һаҡлау идаралығы начальнигы Әлфиә Авзалетдинова хәбәр итте. "Земство табибы" федераль программаһы буйынса районда, ауылда эшләгән йәш табипҡа биш йыл эсендә бер тапҡыр түләнә торған бер миллион һумлыҡ матди ярҙам вәғәҙә ителә. Ҡулына яңы ғына диплом алған хеҙмәткәрҙәр ошо программаға эләгергә теләп, баш ҡалала ҡалмай, ауылға эшкә китә. Өҫтәүенә, Өфөлә табиптарҙың уртаса эш хаҡы республика күрһәткесенән 16 процентҡа кәмерәк. Шулай уҡ яҡшы хеҙмәткәрҙәр шәхси дауаханаларға, башҡа төбәктәргә китеүҙе лә хуп күрә. Сөнки шәхси учреждениеларҙа белгестәрҙең эш хаҡы күпкә юғарыраҡ.

Хәлде яҡшыртыр өсөн Башҡорт дәүләт медицина университетының Өфөлә эшләргә иҫәп тотҡан сығарылыш студенттарын интернатурала бюджет иҫәбенә уҡытыу ғәмәлгә индерелгән. Былтыр 1,3 миллион һумға 37 интерн уҡытып сығарылған. Быйыл 26 белгес әҙерләнә. Шулай уҡ хеҙмәткәрҙәрҙе дәртләндереү ниәте менән ҡала округы хакимиәте тарафынан БР Дәүләт Думаһына тәҡдимдәр әҙерләнә. Улар нигеҙҙә торлаҡ мәсьәләһенә, эш хаҡына ҡағыла.

Федераль ҡануниәткә ярашлы, быйылдан алып муниципаль медицина учреждениелары субъект ҡарамағына күсергә тейеш. Әммә әлегә БР Дәүләт Йыйылышы - Ҡоролтай ҡарары менән Өфөлә һаулыҡ һаҡлау системаһы муниципаль ҡарамаҡта ҡалдырылған. Ҡарарҙың көсөн йәнә өс йылға оҙайтырға ниәтләйҙәр. Ҡала округы хакимиәте башлығының социаль мәсьәләләр буйынса урынбаҫары Әлфирә Баҡыева әйтеүенсә, был осраҡта ҡала дауаханаларын хакимиәт тарафынан финанслап тороу мөмкинлеге буласаҡ. Новосибирск, Силәбе, Екатеринбург кеүек эре ҡалаларҙа ла ошондай ҡарар ҡабул ителгән.

Өфө дауаханаларында Рәсәйҙә тәүгеләрҙән булып берҙәм электрон регистратура индерелгәйне. Уның ярҙамында табиптарға эләгеү еңелләште, сиратҡа тороу тәртипкә һалынды. Әммә барыбер халыҡтың күбеһе белгестәргә ҙур ҡыйынлыҡ менән эләгә. Әлфирә Миңнулла ҡыҙы әйтеүенсә, бының сәбәбе регистратураның түбән кимәлдә эшләүендә түгел, ә кадрҙар етешмәүендә. Табиптар аҙ булғанға, сират ҙур. Поликлиникаға алдан яҙылмай килеүселәр ҙә була. Һөҙөмтәлә ике сират барлыҡҡа килә. Был инде медицина проблемаһы түгел, ә әхлаҡи мәсьәлә, ти Әлфирә Миңнулла ҡыҙы. Йәғни халыҡтың мәҙәни кимәлен күтәрергә кәрәк. Шул ваҡытта ғына табип ишеге алдында ыҙғыш-талаш кеүек йәмһеҙ күренештәр юҡҡа сығасаҡ.

*...ҒӘҘӘТТӘРЕ КҮРКӘМ*

# ЙӘШЕЛ ҠАЛА...

## йәмле ҡала тигәнде аңлатмай әле

**Өфө ҡала округы хакимиәте башлығы Ирек Ялалов ҡаланың архитекторҙары менән осрашты. Сарала Өфөнөң тышҡы йөҙө, йорттар, юлдар төҙөлөшөнә ҡағылышлы проблемалар күтәрелде.**

### Үҙәккә бейек йорттар кәрәкмәй

Ирек Ишмөхәмәт улы билдәләүенсә, бөгөн баш ҡалабыҙҙа уңайлы һәм арзан булған заманса объекттар төҙөлмәй тиерлек. Өфөлә төҙөлөш һаман да совет заманындағы алымдар менән башҡарыла. Һуңғы йылдарҙа төҙөлгән күп ҡатлы йорттар иһә ҡиммәтле хеҙмәтләндереүҙе талап итә. Ундай йорттарҙы тейешле тәртиптә тотор өсөн торлаҡ-коммуналь хужалығы бихисап аҡса түгә. Өфөлә йорттарҙың архитектураһы ла һоҡланырлыҡ түгел.

- Ситтән килгән ҡунаҡтарҙың бөтәһе лә ҡалабыҙҙың йәшел булыуын билдәләй, - тине ҡала башлығы. - Әммә бер кем дә урамдарҙың, йорттарҙың тышҡы йөҙөн, архитектураһын телгә алмай. Төркиә тәжрибәһен беҙгә лә файҙаланырға була. Унда социаль торлаҡты ҡалаларҙың тарихи йөҙөнә яраҡлаштырып төҙөйҙәр. Һуңғы йылдарҙа ҡаланың үҙәгендә бейек торлаҡ йорттар һалыуыбыҙ хаталы булды. Ошо сәбәпле тарихи ҡомартҡылар юҡҡа сыҡты, ҡаланың йөҙө боҙолдо. Үҙәктә күп тигәндә биш ҡатлы өйҙәр генә һалынырға тейеш...

Ҡала етәксеһе менән архитекторҙар ҙа килешә. Улар әйтеүенсә, тарихи ҡомартҡыларҙы урынынан күсерергә ярамай, сөнки был осраҡта улар юҡҡа сыға. Һуңғы арала һүтелеп, башҡа урынға күсереп ултыртылған 13 тарихи бина сереп бөтөп бара икән.

Урамдарға тарихи исемдәрҙе ҡайтарыу тәҡдиме бар. Әммә был мәсьәләлә халыҡ фекерен тыңлап эш итергә кәрәк, ти ҡала етәкселеге.

- Әлегә өфөлөләр быға әҙер түгел. Эште әкренләп башларға кәрәк. Быйыл беҙ тарихи урамдарға элекке исемдәре яҙылған алтаҡталар ҙа элергә уйлайбыҙ. Тимәк, ундай урамдарҙың ике исеме буласаҡ...

### Ҡала мәҙәниәте юҡ

Ҡала башлығы өйҙәрҙең балкон, лоджияларына иғтибар йүнәлтергә саҡырҙы. Уларҙың хәл торошо, дөрөҫөрәге, ниндәй маҡсатта файҙаланылыуы ҡала йөҙөнә күркәмлек өҫтәмәй. Баҡтиһән, электән килгән ғәҙәт буйынса, күбеһе балконды кер элеү урынына ҡуллана икән. Өфөлә йәшәүселәрҙең күҙе быға, бәлки, өйрәнеп тә бөткәндер, ә бына сит ил ҡунағы йәмле булмаған күренешкә мотлаҡ иғтибар итә.

- Хатта яңы ғына төҙөлгән өйҙәрҙең лоджияларын халыҡ келәткә әйләндереп бөтә. Балкондарға нимә генә сығарып ташламайҙар. Шуға балкондарҙы төҙөгәндә ҡараңғылатып эшләнгән быяла файҙаланырға кәрәк, - тине И. Ялалов. Ғөмүмән, етәксе фекеренсә, Өфөлә әлегә ҡала мәҙәниәте үҫеп етмәгән. Бер яҡтан, уны ауылдан ағылып торған халыҡ тотҡарлаһа, Өфөлә тыуып үҫкәндәр үҙҙәре лә был йәһәттән өлгө күрһәтмәй.

### Тимер юл ҡаланы урап үтәсәк

Өфөлә юл архитектураһын камиллаштырыу мәсьәләһе лә бар. Киләсәктә ҡала аша үткән тимер юл үҙгәртелеп, Өфөнө урап үтергә тейеш. Был, беренсенән, ағыулы химия тауарҙарын ташыу хәүефенән ҡотолорға мөмкинлек бирәсәк. Икенсенән, ҡала эсендәге электротранспорт өсөн яңы коридор асыласаҡ. Шулай уҡ Салауат Юлаев проспекты төҙөлөшөн дауам итеү күҙаллана. Был магистраль Бөрө юлына сығырға тейеш буласаҡ.

Ҡала йөҙөнә реклама щиттары ла матурлыҡ өҫтәмәй. Улар тулыһынса юҡ ителмәйәсәк, тине И. Ялалов, ләкин форматтары үҙгәрәсәк. Йәғни ҙур щиттарҙан баш тартасаҡтар. Бөгөн был ҡоролмалар ҡала бюджетына йыл һайын йөҙ миллион һум аҡса килтереп тора. Ындай реклама бизнесында ике мең кеше хеҙмәт итә.



Өфө үҙәгенән 30 предприятие ситкә сығарылырға тейеш. Әлегә быға биш предприятие ризалыҡ биргән. Яңы урынға күсерелгән сәнәғәт объекттары иһә заманса итеп яңынан ҡоролаcаҡ.

**ШУЛАЙ ИТЕП...**

**Ирек Ялалов билдәләүенсә, бөгөн илдең эре ҡалалары араһында бик ҡаты конкуренция бара. Ҡалалар кадрҙар, инвесторҙар, федераль аҡса өсөн көрәшә. Ҙур ҡалалар араһында Өфөнөң бюджеты иң бәләкәйе. Әлегә беҙ башҡаларҙан ҡалышмайбыҙ. Әммә бөгөнгө темптар менән үҫешеүҙе дауам итһәк, күпкә артта тороп ҡалыуыбыҙ бар. Шуға күрә ҡала етәксеһе бар матди һәм кеше ресурстарын, шул иҫәптән архитекторҙарҙы, Өфөнө үҙгәртеүгә үҙ өлөшөн индерергә саҡыра.**

**Мәһәҙи МОРАТОВ.**

*ҺЕҘҘЕ АЛДАЙҘАР!*

# ТЕЛЕФОНЫҢА КИЛГӘН...

## һәр хәбәргә ышанма

**Рәсәй һәм Башҡортостан Республикаһы территорияһында кеҫә телефоны менән бәйле яңы төр мутлашыу осраҡтары теркәлгән. Мутлашыуҙар төбәк-ара характерға эйә һәм Рәсәй банкы исеменән эш ителә.**

Кеҫә телефонына "Һеҙҙең банк картаһы блокировкаланған. Пин-кодты ватырға тырышыу осрағы теркәлгән. Мәғлүмәтте Үҙәк банктың "Ҡыҙыу телефоны" буйынса алырға мөмкин" тигән смс-хәбәр килә һәм артабан 11 һандан торған телефон номеры күрһәтелә.

Республиканың Милли банкы төбәк халҡын иғтибарлы булырға саҡыра. Ошондай йөкмәткеле смс-хәбәр алған осраҡта, тулы мәғлүмәт алыу өсөн күрһәтелгән телефон номерына түгел, ә банк картаһының йәки банк менән төҙөлгән килешеүҙең артында күрһәтелгән телефон номерҙары буйынса шылтыратыу мөһим.

Рәсәй банкы һәм уның төбәктәрҙәге учреждениелары (шул иҫәптән Башҡортостан Милли банкы ла) төрлө кредит ойошмаларының эшмәкәрлегенә ҡатнашмай һәм уларҙың клиенттары менән эш итмәй. Өҫтәмә мәғлүмәтте Башҡортостан Республикаһы Милли банкының (347) 279-65-00 ҡыҙыу телефоны буйынса алырға мөмкин.

## Б А Ш   Ҡ А Л А   Х Ә Б Ә Р Ҙ Ә Р Е

✓ Башҡортостанда математика буйынса Берҙәм дәүләт имтиханын 25733 кеше тапшырҙы, шуларҙың 13330-ы (5,16%) минималь баҫҡысты үтә алманы. Былтыр 668 уҡыусы "икеле" билдәһе алғайны. Төбәктә 100 баллыҡ һөҙөмтә юҡ. Уртаса балл 49,36 тәшкил итә, был 2011 йылға ҡарағанда 6,14-кә кәмерәк. Иҫегеҙгә төшөрәбеҙ, математика һәм рус теле Берҙәм дәүләт имтиханының мотлаҡ предметтары булып тора. Уларҙың һөҙөмтәләре аттестат алыуға йоғонто яһай.

✓ Өфө ҡала округы хакимиәтенең йәштәр сәйәсәте буйынса комитеты Ҡала йәштәр һабантуйына саҡыра. Программала: мини футбол, гер спорты ярыштары, ат сабышы, төрлө уйындар, конкурстар, бүләктәр. Һабантуй 27 июндә "Аҡбуҙат" ипподромында көндөҙгө сәғәт 1-ҙә башлана.

✓ З. Исмәғилев исемендәге Өфө дәүләт сәнғәт академияһы студенты Иҙел Аралбаев Хакасияла үткән "От Ыры" Этник эстрада халыҡ-ара фестивалендә "Буранбай" йырын йырлап, иң юғары баһаға - I дәрәжә лауреат исеменә лайыҡ булды. Фестивалдең призлы урыны өсөн Ҡытай, Молдова, Тыва, Тажикстан, Саха (Яҡутия), Алтай һәм Иркутск өлкәһе таланттары көрәшә, баһалама ағзалары Иҙел Аралбаевты бөтәһе араһынан иң лайыҡлыһы тип таба.

✓ 20 июндән ҡабул итеү кампанияһы старт алды һәм ул 25 июлгә тиклем дауам итәсәк. Яңы уҡыу йылында республикала 10910 студент юғары уҡыу йорттарының бюджет урындарында уҡыясаҡ. Былтыр бюджет урындары10050 булған. Быйыл абитуриент биш уҡыу йортона, һәр береһендә өсәр специальность буйынса документтарын тапшыра аласаҡ.

✓ Йәкшәмбе, 24 июндә республикала көндәр бер аҙ һыуытасаҡ. Төндәге йылылыҡ 11-16 градусҡа тиклем төшәсәк. Ямғырҙар 25 июнгә тиклем дауам итәсәк. 27 июндән һауа температураһы тағы ла йылытасаҡ һәм 25-30 градус буласаҡ. Был хаҡта Гидрометтан хәбәр итәләр.

✓ Өфө округы хакимиәте сайтына ингәндәрҙең шәхсән Ирек Ялаловҡа һорау бирергә мөмкинлеге бар. Хакимиәт сайтында айырым бит булдырылған, унда ҡала халҡы иҫкәрмәләрен һәм теләктәрен ҡалдыра ала. Мәғлүмәт буйынса сайтта аралашыу "Йәнле журнал"дағы блогты алмаштырған. Шулай уҡ хакимиәттең "Мэрия" абоненты өсөн 2-770-911 һандары буйынса ҡыҙыу пейджер ҙа эшләй.

*КӘРӘКЛЕ МӘҒЛҮМӘТ*

**Көндәр йылыныу менән шәхси хужалыҡтарҙа ла, ҡала төҙөлөштәрендә лә эштәр әүҙемләшә, тимәк, эшсе ҡулдар ҙа күберәк талап ителә. Ошондай ваҡытта Рәсәйгә, шул иҫәптән республикаға күпләп ағылған сит ил граждандарының хеҙмәте ҙур һорау менән файҙаланыла. Тик быйдай хеҙмәт законлаштырылған осраҡта ғына ике яҡҡа ла файҙа килтерергә мөмкин. Ә быйдай хеҙмәтте кем законлаштыра? Был бурыс Рәсәй Федерацияһы Миграцион хеҙмәтенең Башҡортостан буйынса идаралығы тарафынан тормошҡа ашырыла. Яңыраҡ 20 йыллыҡ юбилейын билдәләүсе был идаралыҡтың етәксеһе Борис Миҙхәт улы ҒӨЗӘЙЕРОВ, идаралыҡтың хеҙмәт миграцияһы мәсьәләләре бүлеге етәксеһе Хәйҙәр Сибәғәт улы ӘЛИБАЕВ һәм сит ил паспорттары эшләү бүлеге етәксеһе Нәзиф Наил улы НАЗАРОВ журналистар менән осрашты һәм идаралыҡ эшмәкәрлеге менән таныштырҙы.**




# ҠУНАҠ ИКӘНЕҢДЕ ОНОТМА ҺӘМ...

## был илдең йолаларын бел

Рәсәй Федерацияһы миграцион хеҙмәтенең Башҡортостан буйынса идаралығы бөгөнгө көндә Рәсәй гражданлығын рәсмиләштереү, Рәсәй һәм сит ил паспорттарын эшләү, миграция иҫәбенә ҡуйыу, сит ил граждандарына Рәсәйгә инеү өсөн саҡырыу ҡағыҙы, виза, эшкә килеүселәргә патент биреү һәм башҡа күп төрлө дәүләт хеҙмәте күрһәтә. Идаралыҡ эш башлаған осорҙа төп иғтибар мәжбүри күсеп килеүселәр һәм ҡасаҡтарға йүнәлтелһә, бөгөн иһә сит ил граждандарының законһыҙ эшмәкәрлеген кисектереү, уларға эшләү өсөн рөхсәт ҡағыҙы - патент биреү, кешенең биометрик мәғлүмәттәре тупланған яңы төр паспорт һәм сит ил паспортын эшләү кеүек мәсьәләләр тәүге урындарҙы биләй.

Республикаға эшкә килеүсе сит ил гражданына патент биреү хеҙмәте 2010 йылда булдырылған. Ҡулында нәҡ ошондай ҡағыҙ булған сит ил гражданы ғына республикала эшләү хоҡуғына эйә. Башҡортостан буйынса миграцион хеҙмәт идаралығы етәксеһе Борис Ғөзәйеров белдереүенсә, йылдан-йыл республика территорияһында патент алып, законлы рәүештә эшләргә теләүселәр һаны арта. Мәҫәлән, былтыр идаралыҡҡа 13 меңдән артыҡ сит ил гражданы ошондай һорау менән мөрәжәғәт итһә, ағымдағы йылдың 5 айында иһә был һан 10 меңдән артып киткән. Ә бына Ҡаҙағстан һәм Беларусь республикаһынан эшкә килеүселәр алдында патент алыу мәсьәләһе тормай һәм улар Рәсәй граждандары менән бер рәттән эшләү хоҡуғына эйә. Патент биреү ағымдағы йылдың 5 айында республика бюджетын 25 миллион һумға тулыландырырға мөмкинлек биргән.

Төбәккә эшкә килеүсенең ҡулында патент булыуы үҙенә генә түгел, ә шулай уҡ уны эшкә алырға теләүсе физик йәки юридик шәхес өсөн дә мөһим. Патентһыҙ, тимәк, республика территорияһында эшләргә рөхсәте булмаған сит ил гражданын эшкә алған өсөн физик шәхескә 5000 һумға, ә юридик шәхескә һәр бер эшсе өсөн 800 мең һумға тиклем штраф һалынырға мөмкин. Ағымдағы йылда ошондай хоҡуҡ боҙоуҙарға ҡарата һалынған штраф күләме 30 миллион һумдан ашып киткән.

Яҡын киләсәктә миграцион хеҙмәт өлкәһендә буласаҡ үҙгәрештәрҙең береһе - Рәсәйгә эшкә килеүсе кешенең теге йәки был квалификацияһын дәлилләүсе документы булырға тейеш. Был үҙгәреш илдәге актуаль мәсьәләләрҙең береһен - сит ил граждандарының үҙҙәрен тәртипһеҙ тотошон ыңғай яҡҡа хәл итеүҙә ярҙам булыр, тип ышанғы килә, сөнки белемле кешенең, ғәҙәттә, был сифаттары ла юғары кимәлдә була. Ә бөгөнгө көндә иһә көн дә меңәрләп ағылған кеше араһында белемле кешеләрҙең бик әҙ булыуы күҙәтелә. Мәҫәлән, ағымдағы йылдың 5 айында республикаға эшкә ни бары 25 кенә (!) юғары белемле кеше килгән. Дөйөм һан алдында был, әлбиттә, бик бәләкәй күрһәткес. Шулай уҡ Идаралыҡ етәксеһе фекеренсә, Рәсәйгә килеүсе сит ил граждандарынан урыҫ теленән һәм тарихтан имтихан тапшырыуҙы талап итеү ҙә урынлы, сөнки эшкә килеүселәрҙең урындағы закондарҙы үтәүе, ғөрөф-ғәҙәттәрҙе һанлауы мотлаҡ булырға тейеш.

Бөгөнгө көндә Идаралыҡ утыҙлаған сит ил граждандары менән эшмәкәрлек алып бара. Улар араһында Үзбәкстан (60 процент тирәһе), Әрмәнстан (6,9 процент), Тажикстан (6,2 процент), Төркиә (1,9 процент) һәм башҡа илдәрҙең граждандары бар. Республикаға эшкә килеүселәрҙең күп өлөшө төҙөлөштә, ауыл хужалығында, транспорт һәм башҡа өлкәләрҙә эшләй. Идаралыҡтың хеҙмәт миграцияһы бүлеге етәксеһе Хәйҙәр Әлибаев белдереүенсә, мәҫәлән, Туймазы ҡалаһы һәм районы территорияһында ғына 4 меңдән ашыу сит ил гражданы йәшелсә-емеш үҫтерә. Был ҙур бер ауылдың халҡы иҫәбенә тиң һан.

Тағы ла бер ҡыҙыҡлы факт. Һуңғы йылдарҙа Идаралыҡҡа эшләргә рөхсәт алыу йәки гражданлығын рәсмиләштереү маҡсатында бер вьетнам кешеһе лә мөрәжәғәт итмәгән. Был осраҡта Дим һәм Черниковка биҫтәһендә күпләп йәшәгән һәм эшләгән вьетнамдар рөхсәтһеҙ эшләйме, тигән һорау тыуа. Баҡтиһәң, уларҙың күбеһе Рәсәйгә 10-15 йыл элек килгән вьетнамдарҙың балалары икән, тимәк, улар күптән Рәсәй гражданлығы алған һәм законлы рәүештә эшмәкәрлек алып бара. Шулай уҡ йәшәргә рөхсәт алыусы вьетнам халҡы ла бихисап. Ә Рәсәй гражданлығы һәм йәшәүгә рөхсәте булған кешегә, тәбиғи, патент алыу мөһимлеге юҡ.

Йәй шулай уҡ сит ил паспортын эшләү бүлеге хеҙмәткәрҙәре өсөн дә ҡыҙыу осор, сөнки сит илгә ял итергә китеүселәр, тимәк, сит ил паспортын эшләтергә теләүселәр һаны ла бермә-бер арта. Сит ил паспортын эшләүгә ғаризаларҙы электрон портал аша ҡабул итә башлау граждандарға был мәсьәләне хәл итеүҙә ҙур ярҙам, ти бүлек етәксеһе Нәзиф Наил улы. Мәҫәлән, 2011 йылда ошо юл менән 3400 кеше сит ил паспорты алһа, 2012 йылдың уҙған биш айында был һан 3762-гә еткән. Электрон портал аша сит ил паспорты юллау бик уңайлы, тип белдерә бүлек етәксеһе, сөнки кеше күп тапҡыр Өфөгә килеп йөрөү, сираттарҙа тороу, бихисап ҡағыҙҙар тултырыуҙан арына. Шулай уҡ Интернет селтәре аша килгән ғаризаның тәү сиратта ҡаралыуы ла был хеҙмәткә ыңғай баһа бирә.

**ШУЛАЙ ИТЕП...**

**Берәү ҙә үҙ теләге менән тыуған яғын, ғаиләһен ҡалдырып, аҡса артынан сит тарафтарға сығып китмәй. Был аҙымға мохтажлыҡ этәрә. Шуға күрә урындағы халыҡҡа ла, сит илдән килеүселәргә лә бер-береһенә ҡарата кешелекле мөнәсәбәт һаҡлау мөһим. Ләкин быйның өсөн, тәү сиратта, эшкә килеүселәр үҙҙәрен был илдә ҡунаҡ икәнен онотмаҫҡа тейеш. Нәҡ ошо талаптың үтәлеүен контролдә тотоуы менән дә әһәмиәтле миграция хеҙмәте.**

**Гөлназ САФУАНОВА.**

*ҺОРАУ-ЯУАП*

## МИРАҪТЫ НИСЕК БҮЛЕРГӘ?

**Миңә һәм апайыма мираҫҡа ер биләмәһе һәм йорт ҡалды. Мин мираҫ урынлашҡан ҡалала, ә апайым ситтә йәшәй. Мираҫты ҡабул итеп алыу өсөн 4 ай ваҡыт ҡалды. Мин барлыҡ кәрәкле документтарҙы йыйып, үҙ өлөшөмдө алдым, ә апайым мираҫтағы үҙ өлөшөнән баш тартыу хаҡында ҡағыҙға ҡул ҡуйырға ла, мираҫты ҡабул итеп алыу өсөн бында килергә лә йыйынмай, ә ер һәм өй өсөн барлыҡ түләүҙәрҙе әлегәсә мин алып барам. Нисек итеп был хәлдән сығырға?**

- Һеҙгә икенсе вариҫтың булыуы хаҡында нотариусҡа әйтергә кәрәк. Үҙ сиратында нотариус уға хат аша мираҫ һәм уны ҡабул итеп алыу ваҡытының һуңғы срогы хаҡында хәбәр итә. 6 ай үткәс, мираҫ вариҫтар араһында бүленә, ә мираҫ хаҡында белеп тә, дәлилһеҙ сәбәптәр арҡаһында уны ҡабул итмәгән вариҫтар артабан мираҫҡа хоҡуҡ белдерә алмай.

## ӘСӘЛЕК КАПИТАЛЫ ТЕЙЕШМЕ?

**Беренсе никахта минең балам тыуҙы, ләкин бер тәүлектән һуң үлде. Хәҙер мин икенсегә кейәүҙә һәм бала көтәм. Ул тыуғас, мин әсәлек капиталына дәғүә итә аламмы?**

- Эйе, һеҙ әсәлек капиталына дәғүә итә алаһығыҙ. Уның өсөн тәүге баланың тыуған урынында ЗАГС-тан тыуыу тураһында таныҡлыҡ һәм үлеү хаҡында белешмә алырға кәрәк. Был документтар әсәлек капиталы алыу өсөн Пенсия фондына мөрәжәғәт иткәндә кәрәк буласаҡ.

## ФАТИРҒА НИСЕК ТЕРКӘРГӘ?

**Ғаиләбеҙҙә балиғ булмаған бер бала бар. Ирем уны фатирға теркәүҙән баш тарта. Фатир иремдең шәхси милке. Мин үҙем ул фатирға теркәлгәнмен. Иремдең ризаһыҙлығына ҡарамайынса, баланы фатирға теркәй аламмы?**

- Балиғ булмаған балалар шәхси милек хужаһының теләгенә ҡарамайынса, атаһы йәки әсәһе теркәлгән фатирҙа йәки йортта теркәлергә тейеш. Шуға күрә һеҙ балағыҙҙы үҙегеҙ теркәлгән фатирға законлы рәүештә теркәй алаһығыҙ.

# Х А Л Ы Ҡ  Д А У А Һ Ы



## Ауыр эштән бил ауыртҡанда

❖ 2 һауыт спиртлы йодҡа бер лимон һутын ҡушып болғатырға һәм ятыр алдынан бөтә арҡа буйлап бер сирек киңлектә һөртөргә.

❖ 2 яңы һалынған йомортҡаны банкаға һытып, ҡабығы менән һалғас, өҫтөнә сыҡҡансы һеркә кислотаһы ҡояһың. Йомортҡа ҡабығы иреп бөткәс, тиресәһен алып ташлайһың да, бер ҡалаҡ май ҡушып болғатаһың. Бер көн ултырғас, ауыртҡан ергә һөртәһең һәм мамыҡ шәл менән бәйләп, өҫтөнә грелка ҡуяһың.

## Организмды таҙартыу

Эштән, донъя мәшәҡәттәренән арып, хәл бөтөп киткәндә дарыу ҡулланмай, үлән менән файҙаланыу яҡшы. 4 ҡалаҡ ҡыҙыл миләш, 3 ҡалаҡ гөлйемеш, 4 ҡалаҡ ҡара ҡарағат, 2 ҡалаҡ әрем (кипкәне лә ярай) алып, ярты литр ҡайнаған һыуҙа төнәтеп, һыуынғас, һөҙәһең һәм көнөнә 3 мәртәбә ярты стакан эсәһең.

**Әнүәрә ХӘЙБУЛЛИНА.**

## Витаминлы салат һәм һут

Ҡыяр, редис, бешкән йомортҡа, кесерткән япрағы, бәпембә япрағын турап, саҡ ҡына үҫемлек майы, тоҙ ҡушып ашарға. Йомортҡа урынана ит тураһаң да ярай. Бәпембә япраҡтарын йыйғас, 1-2 сәғәткә тоҙло һыуға (1 литр һыуға 1 ҡалаҡ тоҙ) һалып торһаң, төрлө ваҡ паразиттар төшөп бөтә.

Бәпембә япраҡтарын сайҡағас, ярты балғалаҡ һут һығып алырға һәм ярты стакан һыуға һалып, көнөнә 1 тапҡыр эсергә. Бал ҡушып ебәрһәң дә була. Был һутты ни тиклем оҙағыраҡ эсәһең, шул тиклем яҡшыраҡ. Ул ябығырға ярҙам итә, тәнде матурлай.

## Бәпембә

Бәпембәнең сәскәләрен йыйырға ла, яҡшылап сайҡатҡас, 1 литрлы банкаға тултырып, мул итеп шәкәр һалырға. Татлы һыу барлыҡҡа килгәнсе өйҙә торорға. Иртәнсәк ас ҡарынға 1 ҡалаҡ эсергә. Дауалау курсы 10-14 көн. Был дарыу яҡшы үт ҡыуыусы сара булып тора. Ашҡаҙанда сей яра булған саҡта ҡулланырға ярамай.

**Флора БИКЕМБӘТОВА.**

***✓ Әлеге ваҡытта йәштәрҙең фәнгә килеүе һүлпәнерәк бара. Бының бер сәбәбе - Европа ҡалыптарына яраҡлашырға тырышыуыбыҙ. Беҙ ҡайһы саҡта үҙебеҙҙең төрки тамырлы булыуыбыҙҙан да оялған һымаҡбыҙ.***



*ЙӘШТӘР ҠОРО*

**Яңыраҡ Алтай республикаһының баш ҡалаһы Таулы Алтайҙа "Төрки телдәре. Филология. Рәсәй халыҡтары телдәре һәм әҙәбиәттәре" тип исемләнгән олимпиада үтте. Унда Башҡортостан студенттары иң отҡоро булып сыҡты. Шәхси беренселек буйынса 1-се урынды М. Аҡмулла исемендәге Башҡорт дәүләт педагогия университеты студенты Гөлнара Яҡупова яулаһа, 2-се урынға - З. Биишева исемендәге Стәрлетамаҡ дәүләт педагогия академияһы студенты Лилиә Байғужина, 3-сө урынға иһә Башҡорт дәүләт университетынан Айгөл Миңнуллина лайыҡ булды. Ә башҡа студенттар - Айнур Фәхретдинов (БДПУ), Илнур Сәғиҙуллин (БДПУ), Гөлнур Ҡотлобаева (БДУ), Рәсимә Имелбаева (БДУ), Светлана Мозафарова (БДПУ) һәм Гөлсәсәк Әмирғәлина (СДПА) төрлө номинациялар буйынса еңеүселәр тип табылды. Олимпиадала ҡатнашыусыларҙың бер нисәһе ошо саранан алған тәьҫораттары менән уртаҡлашты.**

# "БАШҠОРТ" ТИГӘН ИСЕМГӘ...

## мәртәбә генә өҫтәнек



**Светлана МОЗАФАРОВА:** Алтай республикаһында төрки телдәре һәм әҙәбиәте буйынса олимпиада үткәреү традицияға әүерелгән. Сарала башҡорттарҙың ҡатнашыуы ла ғәҙәти күренеш. Башҡорт дәүләт педагогия университеты был ярышта инде өсөнсө йыл ҡатнаша. Бынан алдараҡ үткән олимпиадала БДПУ студенттары өсөнсө урынға лайыҡ булғайны. Беҙҙе юлға оҙатҡан саҡта деканыбыҙ Луиза Хәмзә ҡыҙы Сәмситова менән ректорыбыҙ Раил Мирвай улы Әсәҙуллин: "Беренсе урын яуламаһағыҙ, ҡайтмаһағыҙ ҙа була", - тип, уйынлы-ысынлы теләк теләгәйне. Был теләкте тормошҡа ашырҙыҡ. Әйткәндәй, терәк-таяныс булғандары өсөн уларға ҙур рәхмәтебеҙҙе еткерергә теләйбеҙ.

Миңә тыва милләтле йәштәр менән аралашыу мөмкинлеге тейҙе. Тываларҙа милли рух тойғоһо беҙҙең менән сағыштырғанда көслөрәк. Бында республика халҡының 70-80 процент самаһын тыва милләте тәшкил итеүе лә роль уйнайҙыр, һәр хәлдә, йәштәргә милли мөхиттең йоғонтоһо һиҙелә. Ә бына алтайлы милләтле туғандарыбыҙ тураһында бер аҙ күңелде ҡырған мәғлүмәттәр ишетеп ҡайттыҡ. Урындағы халыҡ әйтеүенсә, Алтай ерендә сиркәүҙәр күпләп төҙөлә, ә был аҫаба халыҡты ла ошо дингә күпләп ылыҡтырыуға булышлыҡ итә. Беҙгә алтайҙар был турала бик әсенеп һөйләне. Юлда барған саҡта күп кенә тауҙарҙа тәреләр тороуына иғтибар иттек, алтайлыларҙың борсолоуы ниндәй масштабта булыуын аңланыҡ һәм уларға рух ныҡлығы теләнек.

**Азалия ХУРАМШИНА:** Алтайҙа тәбиғәттең аяуһыҙ бысратылыуына шаһит булырға тура килде. Ололар беҙгә ситтән туристар килеп, алтайлылар изге тип һанаған тәбиғәтте бысратыуҙары тураһында әсенеп һөйләне. Улар беҙҙе төрлө тәбиғәт ҡурсаулыҡтары, башҡа тарихи урындар буйлап алып йөрөр алдынан: "Беҙгә һәр ваҡыт килегеҙ, әммә тәбиғәтебеҙҙе, еребеҙҙе, һыуыбыҙҙы ғына бысратмағыҙ", - тип үтенде. Ошолайтып иҫкәртеү кәрәктер һәр кемде лә, сөнки был һүҙҙәрҙе ишеткән кеше барыбер үҙенең тәртибен контролдә тоторға тырыша бит.

Алтайҙа төрки йәштәре менән аралашҡанда үҙ-ара берҙәмлек етешмәүе тураһындағы борсоуҙарыбыҙ менән уртаҡлаштыҡ. Был барлыҡ төрки халыҡтарына хас булған уртаҡ проблема. Әйткәндәй, тап йәштәр араһында берләшеү процесы башланды шикелле. Был һуңғы йылдарҙа Өфөлә айырыуса асыҡ күҙәтелә. Йәштәр айыҡлыҡ акциялары, башҡорт телендә башҡа төрлө саралар ойоштора, башҡорт яҙыулы, башҡорт символикалы футболкалар кейә. Йәштәрҙең берләшеүе, минеңсә, тәбиғи процесс. Берләшмәй тороп, бөгөн алға барып та булмай. Уй-фекерҙәр, ҡыҙыҡһыныуҙар берегеүе тағы ла ҙурыраҡҡа - милли мәнфәғәттәр өсөн берләшеүгә алып киләсәк.

**Айнур ФӘХРЕТДИНОВ:** Бөгөн фән менән шөғөлләнергә теләгән йәштәрҙе күтәрергә тырышып торалар, әммә йәштәр абруйлы уҡытыусыларының, ғалимдарҙың фекеренә ҡаршы фекер әйтергә, улар менән фәнни бәхәс ҡорорға батырсылыҡ итмәй. Бөгөнгө тел ғилемендәге деградация, мәҫәлән, Жәлил Кейекбаевтың абруйы алдына баш эйеүҙән дә киләлер. Яҡшы уҡыусы үҙенең уҡытыусыһын фекерләү ҡеүәһе, асыштары буйынса күпкә үтеп китергә тейеш, тигән принцип, ниңәлер, беҙҙең тел ғилемендә әлегә һүлпәнерәк эшләй төҫлө.

Урта быуаттарҙа башҡорт яҙма теле иҫке төрки яҙма теленә нигеҙләнгән булған. Ул ваҡыттағы графиканың үҙенсәлектәре арҡаһында башҡорт кешеһе яҙған әҫәрҙе шул уҡ төрки телле башҡа халыҡтарҙың зыялылары ла бик еңел уҡый, аңлай алған. Иҫке төрки яҙмаһының иң ҙур уңышы шул: ул төрки халыҡтары өсөн яҙма аралашыу сараһы булып хеҙмәт иткән. Иҫке төрки графикаһын бөгөн дә юғары уҡыу йорттарында өйрәтәләр. Ошо графиканы яҡшы белгән студент төрки халыҡтарының да, шул иҫәптән башҡорт яҙма ҡомартҡыларының да төп нөсхәһен уҡыу мөмкинлегенә эйә. Олимпиадала ошолар хаҡында ла һөйләнек, фекер алыштыҡ.

**Илнур СӘҒИҘУЛЛИН:** Ике көн дауамында барған олимпиаданың тәүге көнөндә - тел, икенсе көнөндә әҙәбиәт буйынса һорауҙар бирелде. Төрки халыҡтары телдәре менән башҡорт теле араһындағы оҡшашлыҡтар бихисап булыуы ҡолаҡҡа салынды. Мәҫәлән, хакас, тыва һәм алтай телендә һөйләшеүселәрҙең күп кенә һүҙҙәре, телмәре яҡшы аңлашылды миңә. Бынан сығып, башҡорт телен белеүҙең тағы бер ыңғай яғын аңланыҡ: утыҙҙан ашыу төрки халыҡтары менән аралашыу сараһы ла ул. Тәүге мәлдәрҙә аралашыуыбыҙ рус телендә барһа, аҙағыраҡ туған телдәребеҙҙә аралаша, аңлаша башланыҡ. Тел мәсьәләһендә аңлашылмаусанлыҡтар булманы. Төрки телдәр төркөмөнә ингән күп кенә телдәрҙе бөгөн "Ҡыҙыл китап"ҡа индерергә була. Сөнки ҡайһы бер милләттәр ассимиляция процесы кисерә, һан яғынан кәмей бара. Шор, тофалар телдәре - быға асыҡ миҫал. Башҡа төрки телдәре менән сағыштырғанда, башҡорт телен яҡшы өйрәнелгән телдәр иҫәбенә индерергә булалыр, тип әйтә алам. Шулай ҙа, Татарстан менән сағыштырһаҡ, уларҙа фән докторҙары күберәк. Был турала беҙгә Луиза Хәмзә ҡыҙы гел әйтә килә, был факт менән беҙҙә сәм уята. Шуға күрә беҙгә, студенттарға, үҙебеҙҙең белемебеҙҙе камиллаштырырға, башҡорт тел ғилемен үҫтереүгә үҙ өлөшөбөҙҙө индерергә кәрәк. Ошо рух менән олимпиадаға әҙерләндек һәм уҡытыусыларыбыҙҙың өмөттәрен аҡланыҡ.

**Гөлнара ЯҠУПОВА:** Алтайҙа йәшәүсе халыҡ тәбиғәткә күпкә яҡыныраҡ. Улар ябай ғына тау шишмәләренә, хатта ҡала эсендә арыҡтан ағып ятҡан һыуҙарға ла йәншишмәгә ҡараған һымаҡ ҡарай. Мин уларҙа боронғо башҡорттарҙа ғына булған һыҙаттарҙы тойҙом. Ерҙәренә кем генә аяҡ баҫһа ла, улар ҡунаҡтарға яҡты йөҙ күрһәтеп ҡаршы ала. Ата-бабаларыбыҙға хас ихласлыҡ бар уларҙа. Был ҡунаҡсыллыҡтың тамырҙары әлеге лә баяғы тәбиғәткә яҡын булыуҙан киләләр инде.

Төрки халыҡтарының, ғөмүмән, берберећенә оҡшаш һыҙаттары ла, айырмалыҡтары ла бихисап. Мәҫәлән, алтайлылар менән аралашҡан саҡта үҙҙәрен тотоуы, донъяға ҡарашы менән башҡорт халҡына яҡыныраҡ тороуҙарын тойҙоҡ. Әйтәйек, беҙҙәгесә баҫалҡылыҡ бик ныҡ күҙгә ташланды. Алтай республикаһының дәүләт гимнын тыңлағанда үҙебеҙҙең Башҡортостан гимны менән уртаҡ мотивтар барлығын ишетеп ҡыуандыҡ.

Бөгөнгө фәнгә күп уҡыған, уйлана, эҙләнә белгән, шулай уҡ шикләнә лә белгән йәштәр кәрәк. Телебеҙ йәшәһен өсөн уның һағында телсе ғалимдар тороуы ла шарт бит. Ләкин әлеге ваҡытта йәштәрҙең фәнгә килеүе һүлпәнерәк бара. Бының бер сәбәбе - Европа ҡалыптарына яраҡлашырға тырышыуыбыҙ. Беҙ ҡайһы саҡта үҙебеҙҙең төрки тамырлы булыуыбыҙҙан да оялған һымаҡбыҙ. Шулай уҡ рус, инглиз телдәрен үҙебеҙҙең телдәребеҙҙән өҫтөнөрәк итеп күреп тә өйрәнгәнбеҙ.

Алтайҙа үткән олимпиаданың төп маҡсаты - төрки халыҡтары араһындағы дуҫлыҡты нығытыу булғандыр. Ысынлап та, аҙаҡҡа табан беҙ, төрлө төбәктәрҙән йыйылған студенттар, бер-беребеҙ менән дуҫлашып бөттөк. Сит халыҡтар менән аралашып, мин, мәҫәлән, үҙ халҡыңа ситтән күҙ һалыу мөмкинлеге алдым, тип әйтә алам. Беҙ, үҙ сиратыбыҙҙа, халҡыбыҙ исеменән сығыш яһаусылар булараҡ, "Башҡорт" тигән исемгә тап төшөрмәҫкә тырыштыҡ.

**ШУЛАЙ ИТЕП...**

**Шундай хикәйәт иҫкә төштө. Бер аҡыллы мөғәллим үҙенең уҡыусыларына теүәл фәндәрҙән һабаҡтар бирә. Дәресенең тәүге сирегендә теүәл фән менән шөғөлләндерә, ә ҡалған өлөшөндә төрлө ҡыҙыҡ та, ҡыҙғаныс та хәл-ваҡиғаларҙан торған тормош күренештәрен бәйән итә. Бер көндө бер уҡыусыһы: "Хөрмәтле уҡытыусыбыҙ, теүәл фән өйрәтеүгә күберәк ваҡытығыҙҙы бүлһәгеҙсе, юғиһә, беҙ дәрескә бүленгән ваҡытты дөрөҫ файҙаланмайбыҙ кеүек", - тип, ризаһыҙлыҡ белдерә. Уҡытыусы: "Мин һеҙгә, дәрес өсөн тәғәйенләнгән күпселек ваҡытты фиҙа ҡылып булһа ла, үҙ башымдан үткәндәрҙе һөйләйем һәм үҙемде бәхетле тоям. Сөнки белем: был ғилем һеҙгә ғүмер буйына кәрәк буласаҡ. Әгәр ҙә бала сағымда миңә лә берәй оло кеше тормоштоң, донъяның, ғүмерҙең асылын төшөндөргән булһа, ул кешегә ғүмер буйы хеҙмәт итергә риза булыр инем", - тип яуаплай. Һығымта шул: фәндең үҙен белеү түгел, ә фәнгә илткән урау-урау юлдарҙы дөрөҫ үтә белеү - эҙләнеүсенең уңышы. Әлеге студент йәштәрҙең Алтайҙағы олимпиадала ҡатнашып, донъя күреп, үҙҙәрен лайыҡлы күрһәтеп ҡайтыуы ла фәнгә килтереүсе бер этәргес булыр, тип ышанғы килә.**

**Илгиз ИШБУЛАТОВ**
**яҙып алды.**

*АҒИНӘЙ ҺҮҘҘӘРЕ*

# КҮҢЕЛ КӨҘГӨҢ...

## бөтөн булһын

- Эштә үҙен яндырғандар ҡыҫҡа ғүмерле була.
- Кейем тәнде ҡаплай, яҡшы эш йәнде паклай.
- Башланған ай - тураған ит: ҡаптың, йоттоң, эҙе лә юҡ - ғүмер ҙә шулай.
- Ялған һүҙ теҙгенһеҙ аттай елә, дөрөҫ һүҙ төптән уйлап, башҡа һеңә.
- Ҡойроҡ болғаусылар борондан уҡ булған, уларҙы бөтөрөү мөҙҙәте әле тыумаған.
- Аумаҡай бөтә яҡҡа ла аунай, ялағай ғүмер буйы һәр кемдең таба төбөн ялай.
- Йыумалаҡтар күп ерҙә аҡыллыға урын аҙ, әммә аҡыллының алтын һүҙе йыумалаҡҡа һары таҙ.
- Быяла көҙгөң ыуалһа ла, күңел көҙгөң онталмаһын.
- Тауҙан ҡалып таулыҡҡа бармайҙар, батырҙы күргәс, ҡурҡаҡты һанламайҙар.
- Ике әтәс суҡышҡанда тауыҡтар ҡытҡылдаша, түрәләр сәкәләшкәндә халыҡ зыу төшә.
- Ҡурҡаҡтарға тәпәш яр ҙа бейек, таһылы барға бейек ҡая ла тәпәш.
- Тәрән һыуҙан сығыу өсөн һал ғына түгел, сослоҡ менән таһыллыҡ та кәрәк.

**Әнүәрә ХӘЙБУЛЛИНА.**

*ТАРИХЫҢДАН ДАН ТАП!*

# ҠАҢНЫМ, ҠАҢНЫМ -

## оло даным, үткәнем, атыр таңым!

**Ошо көндәрҙә икенсе йыйынын үткәргән Ҡаңны ырыуы башҡорттары үҙҙәренең гимндарына юҡҡа ғына шундай юлдарҙы индермәгән. Хәйер, республикаға исем биргән халыҡтың һәр ырыу-ҡәбиләһе был юлдарҙы ғорурлыҡ менән һәм лайыҡлы ҡабатлай алыр ине. Сөнки бер милләтте тәшкил иткән һәр ырыуҙың үҙенә генә хас тарихы, данлы юлы, шанлы үткәне, бөгөнгөһө һәм киләсәге бар.**

Бүздәк, Бәләбәй, Ауырғазы, Дәүләкән, Туймазы, Дүртөйлө, Кушнаренко, Благовар, Борай, Мишкә райондарында, Нефтекама, Бөрө, Өфө ҡалаларында йәшәй бөгөн ҡаңнылар. Булып үткән сарала тап ошо төбәктәрҙән йыйылғайны делегаттар. Күбеһе әҙәби башҡорт телендә түгел, диалектта һөйләшһә лә, барыбер ҡандарында, аңдарында, гендарында башҡортлоҡтарын һаҡлап ҡала алғандар. Тап ошо ырыу Башҡортостанға башҡорт ерҙәрен йыйыусы, берләштереүсе Муллаян Халиҡовты, бөйөк шағир ғына түгел, автономия өсөн көрәшеүсе Шәйехзада Бабичты, билдәле башҡорт төркиәтсеһе һәм этнографы, Башҡорт дәүләт университетының башҡорт теле һәм әҙәбиәте кафедраһын ойоштороусы Закир Шакировты, заманында республиканың төньяҡ-көнбайыш райондары мәктәптәрендә башҡортса уҡытыуҙы тормошҡа ашырған Миҙхәт Шакировты, арҙаҡлы дәүләт эшмәкәре Зыя Нуриевты биргән.

Һүҙҙә генә түгел, ғәмәлдә данлы ырыу бөгөн яңынан үҙ асылын эҙләй, булмышын юллай. Һәм, әлбиттә, тотош Башҡортостан алдында торған көнүҙәк мәсьәләләр уларҙың да иғтибарынан ситтә ҡалманы. Өфө авиация техник университеты профессоры Фәнис Шәрипов үҙ сығышында эшһеҙлек, йәштәрҙең алкоголизм, наркомания менән ағыуланыуы, балалар һәм үсмерҙәр сәләмәтлеге проблемаларына туҡталып, бөтөн был кире күренештәрҙе ғаилә экологияһын һауыҡтырып ҡына бөтөрөп булыуын һыҙыҡ өҫтөнә алды: "Әлбиттә, беҙҙең ойошма ғына барлыҡ был проблемаларҙы хәл итә алмаясаҡ, әммә, минеңсә, ошо күренештәрҙе бөтөрөүҙе ғаиләне һауыҡтырыуҙан, ғаилә экологияһын сафландырыуҙан башларға кәрәк". Шулай уҡ хәҙерге йәштәрҙең эшһөйөүсәнлеге түбән булыуын да билдәләне ул һәм миҫал итеп Бөйөк Ватан һуғышы йылдарында илебеҙҙең бары тик эшһөйәр халҡы ярҙамында ғына Еңеү яулауын килтерҙе. Шуға ла бөгөн төүге урынға эшһөйәрлекте ҡуйырға кәрәк, сөнки хеҙмәтеңә ҡарап хөрмәт килә, тине ул. Шулай уҡ ҡалаларҙағы башҡорт балаларының башҡорт телен белмәүенә үкенес белдерҙе: "Башҡорт теле - мәҙәниәт нигеҙе. Кеше тәү сиратта үҙенең телен белергә тейеш. Әгәр ул бала саҡтан әсә телен белһә, ул мәҙәниәтте лә аңлаясаҡ, тарихына ла иғтибарлы, ихтирамлы буласаҡ, уны өйрәнәсәк, ватансыллыҡ тойғоһо уянасаҡ".

Ғөмүмән, башҡорт телен өйрәнеү темаһы билдәле ғалим, шағир Рәшит Шәкүрҙең сығышында ла айырым урын алып торҙо: "Беҙҙе ассимиляциянан һаҡлай торған көс - ул телебеҙ. Беҙҙе берләштереүсе фактор - ул беҙҙең әҙәби телебеҙ. Хәҙерге әҙәби башҡорт теленә - милли әҙәби телебеҙгә нигеҙ һалыусыларҙың береһе ул Ш. Бабич. 1919 йылда ул "Беҙ ни өсөн советтарға ҡушылдыҡ?" тигән "Көйлө хитаб"ын Саранск ҡалаһында брошюра итеп баҫтыра һәм уны хәҙерге әҙәби телдә яҙа. Тимәк Бабич милләтте консолидациялау, бер бөтөн итеп берләштереп тороуҙа әҙәби телдең көсөнөң мөһим бер ҡорал икәнен аңлаған. Күрәһең, З. Вәлидиҙәр, М. Халиҡовтар менән бергә аралашып йөрөгән ваҡытта тел мәсьәләһен нисек үҫтереү тураһында һөйләшеүҙәр булғандыр. Шуға күрә беҙ бөгөн, ырыуҙарыбыҙҙы берләштереп тороусы көс булараҡ, әҙәби телгә ылығырға тейешбеҙ. Төньяҡ-көнбайыш райондарында башҡортса уҡытыуҙы индергән Миҙхәт Закир улы Шакиров та был йәһәттән бик төптән аңлап эш иткәндер, тип уйлайым. Сөнки уның атаһы Закир Шакиров - башҡорт теле белгесе ине. Ул Аҡмулланың "Башҡорттарым, уҡыу кәрәк!" тигән шиғырын Ҡурған өлкәһенән табып алып ҡайтҡан беҙҙең бөйөк уҡымышлыбыҙ. Әлбиттә, М. Шакировты урынынан төшөргәндән һуң, уның исеменә яла ягыу арҡаһында төньяҡ-көнбайыш төбәктәрҙә мәктәптәрҙә башҡорт әҙәби телен һыпырып ташланылар. Тимәк, кемгәләр ошо райондарҙа әҙәби башҡорт телен уҡытыуҙы бөтөрөү бик кәрәк булғандыр. Бер юлы Шакировты ла бысраттылар, ул башлаған эште лә юҡҡа сығарҙылар".

"Урал" башҡорт халыҡ үҙәге етәксеһе Риф Иҫәновтың сығыш-тәҡдиме ҡаңнылар өсөн генә түгел, барлыҡ ырыуҙар һәм район халыҡтары өсөн дә фәһемле һәм әһәмиәтле булды. Ул һәр райондың ете мөғжизәһен асыҡлап, уларҙы республиканың айырым һаҡлана торған объекттары исемлегенә индереүгә өлгәшеү кәрәклегенә баҫым яһаны. Сөнки бөгөн ер мәсьәләһе бик ҡырҡыу тора һәм ата-бабалар ҡаны тамған изге ерҙәребеҙҙе, ундағы тәбиғәт һәйкәлдәрен, боронғоларҙан ҡалған ҡомартҡыларҙы үҙебеҙ һаҡламаһаҡ, тиҙҙән уларҙың ситтән килеүселәр ҡулына күсеүе лә бик ихтимал.

Ғөмүмән, ҡаңнылар йыйынында ырыу өсөн генә түгел, тотош башҡорт халҡы, Башҡортостан өсөн әһәмиәтле мәсьәләләр күтәрелде һәм улар барыһы ла резолюцияға индерелде. Унда шундай мөһим пункттар бар: Башҡортостанда 2014 йылды тыуыуына 120 йыл тулыу айҡанлы Муллаян Халиҡов йылы тип иғлан итеү, уның исемен мәңгеләштереү буйынса эштәр башҡарыу; Нефтекама ҡалаһының башҡорт гимназия-интернатына Закир Шакировтың исемен биреү; баш ҡалала Шәйехзада Бабичтың бюсын ҡуйыу; һәр райондың ете мөғжизәһен асыҡлау; Нефтекама ҡалаһынан Асылыкүлгә тиклем туристик маршрут ойоштороу, ҡаңны ырыуына ҡараған район һәм ҡалалар мәктәптәрендә башҡорт телен дәүләт теле булараҡ уҡытыуҙы һаҡлап ҡалыу, һ.б. Шулай уҡ йыйында Башҡортостан Республикаһы Президенты Рөстәм Хәмитовҡа мөрәжәғәт тә ҡабул ителде.

**ӘЙТКӘНДӘЙ...**

**"Ҡаңнылар" төбәк ойошмаһы рәйесе Фәнил Шәрипов Муллаян Халиҡов тураһында түбәндәгеләрҙе һөйләне: "Бынан 90 йыл элек Оло Башҡортостан ойошторола: республиканың көньяғы менән көнбайышы берләшә. Был идеяны лайыҡлы рәүештә ҡаңлы ырыуы башҡорто Муллаян Халиҡов тормошҡа ашыра. Көрәштәше Әхмәтзәки Вәлиди сит илгә сығыр алдынан уны ла үҙе менән бергә китергә саҡыра, ләкин ул тыуған ерен ташлап китеүҙән баш тарта. Аҙаҡ ул Башҡортостан Хөкүмәте ағзаһы, Учредительный собраниела һөйләшеүҙәр алып барыусы һәм Башҡортостан автономиялы республикаһы өсөн совет власы менән килешеүгә ҡул ҡуйыу инициаторы, Кесе Башҡортостан Хөкүмәте рәйесе, башҡорт ерҙәрен берләштереүсе, Оло Башҡортостан Хөкүмәте рәйесе була. "Тройка" судынан һуң атырға алып барғас, Муллаян Халиҡов һуңғы һүҙе итеп: "Иҫеңдә тот, йәлләд, йылдар үтер, барыбер минең халҡым автономия, Башҡортостан Республикаһы өсөн мине иҫенә төшөрөр!" - ти. Һәм беҙ, ысынлап та, уны ҙур хөрмәт менән хәтергә алабыҙ. Стәрлетамаҡ ҡалаһында ул БАССР халыҡ комиссарҙары рәйесе булып эшләгән бинала мемориаль таҡтаташ ҡуйылған, ҡала урамдарының береһенә уның исеме бирелгән. Бүздәк районының Иҫке Аҡтау ауылында тыуған йортона мемориаль таҡтаташ ҡуйылған. Район үҙәгенең бер урамы уның исемен йөрөтә. Шулай уҡ Өфөлә, ул Оло Башҡортостан Республикаһы Хөкүмәте рәйесе булып эшләгән бинала ла таҡтаташ ҡуйыласаҡ. Бөгөн был бинала республиканың Милли музейы урынлашҡан. Баш ҡалала бюсын урынлаштырыу өсөн проект-смета документациялары эшләнгән. Стәрлетамаҡта һәм уның тыуған ерендә брошюра һәм беренсе китап донъя күрҙе..."**

**Зәйтүнә ӘЙЛЕ.**

*БАШҠОРТ ҠАМУСЫ*



# ШӘФҠӘТЛЕ ХАЛЫҠ

**Ҡаңны (ҡанлы) атамаһы бик боронғо яҙмаларҙа ла осрай. Төрлө халыҡтар төрлөсә атап йөрөтһәләр ҙә, улар барыһы ла ҡаңны ырыуын аңлата. Ҡайһы бер телдәрҙәге сығанаҡтарҙа "ҡанглы" тип тә яҙалар.**

Ҡытай сығанаҡтарынан тәржемә ителгән яҙмаларҙа конгюйҙар - Хорезм дәүләтен төҙөгән халыҡ, тип билдәләнә. Уларҙың баш ҡалаһы Уюгань дә бар. Конгюйҙар ҡаңнылар булһа, Уюгань Ургенч ҡалаһы икәнен рус ғалимдары Н. Аристов һәм башҡалар асыҡланы, иҫбат итте һәм үҙҙәренсә һығымта яһап ҡуйҙы: ҡаңнылар борон Һырдаръя буйында йәшәгән ҡаңны халыҡтарының вариҫтары.

Ҡаңныларҙың бик күп ерҙәргә таралып ултырыуын риүәйәттәр раҫлай. Ауыҙ-тел ижады юридик документ булмаһа ла, уларҙы иғтибарһыҙ ҡалдырып булмай. Беҙгә килеп еткән риүәйәттәргә ҡарағанда, борон ҡаңнылар Алтай тауы менән Ангара йылғаһы буйында йәшәгән. Уларҙы ул ваҡытта өс ундар, тип атағандар. Тулы аталыштары - өс ун уҡ атарҙар. Төрки теленә тәржемә итеп, "утыҙ уҡ атарҙар" тип килтереп сығарғандар. Ҡытай теленән руссаға "народности тридцати стрел" тип тәржемә иткәндәр. Боронғо атама ни өсөн "утыҙ уҡ атарҙар"? Утыҙ - ғәскәр төрөн, уҡ атарҙар - яу ҡырындағы төп шөғөлдө аңлатҡан. Уларҙың уҡ-йәйәләре бик көслө булған. Һөйәк пластиналар менән нығытылған метр оҙонлоғондағы уҡтарға сүкелгән башаҡтар ҡуйылған. Был уҡтарға хатта Византия легионерҙарының ҡалҡандары ла ҡаршы тора алмаған. Шуға күрә улар яу ҡырында бик ғәйрәтле көс булып һаналған.

Ҡаңнылар ни өсөн таралып ултырған? Беҙҙең эраға тиклем 200 йыл элек һундар Байкал күленең көньяғында йәшәгән. Ҡытайҙар уларҙы ҡара һундар (мосолман) тип йөрөткән. Ә ҡаңлылар - өс ундар Алтай тауҙарында йәшәгән. Бер саҡ һундар батшаһы ғәскәр йыя һәм Ҡытай стенаһын емереп кереп, уларҙы тар-мар итә һәм үҙ биләмәләрен көнбайышҡа табан киңәйтә. Уларҙың биләмәләре Урта Азияға, Һырдаръя буйҙарына, Урал тауҙарынан Ҡара диңгеҙгә тиклем тарала. Арал диңгеҙе, Һырдаръя буйында Хорезм дәүләтен өс ундар төҙөгән тип таныйҙар. Был хаҡта Ҡытай тарихсылары ла яҙып сыға. Ван Говэй яҙыуынса, Хорезм дәүләтен онлылар төҙөгән, улар көнсығыштағы ҡытайҙарға буйһонмаған, ә һундарҙы ихтирам иткәндәр һәм уларҙың ҡул аҫтында йәшәгәндәр, Хорезм дәүләтенән тороп биш биләмә халыҡтары менән идара иткәндәр. Төрөк империяһын төҙөгән полководец яҙыуынса, төрөктәр Монголия яҡтарына барғанда өс ундар, 30 уҡ атарҙар менән һуғышалар, Алтайҙа булғанда уларға ҡаңныларҙың бер өлөшө - ун уғатарҙар һөжүм итә. Төрөктәр Енисей буйында, Һырдаръя буйында өс ундар менән алышалар. Уларҙы буйһондороп, ғәскәрҙәрен үҙҙәренә ҡушалар. Тимәк, ҡаңныларҙың биш биләмә ерҙәре булырға тейеш. Өс биләмә Урал буйҙарында булһа, дүртенсеһе, бишенсеһе - Ҡара диңгеҙ буйында. Биш биләмә ул Ҡытай теленән тәржемә ителгән, беҙ инде уны ҡор тип атайбыҙ. Бер ҡор бер нисә ырыуҙы берләштергән бәләкәй генә бер дәүләт булған. Биш ҡор халҡы менән ҡаңнылар идара иткән. Минеңсә, башҡорт атамаһы ошо "биш ҡор" исеменән килеп сыҡҡан.

Византия императоры Константин Багрянородный империя менән идара итеү тураһында китап яҙып ҡалдырған. 908 йылдарҙа яҙылһа ла, ул һаман да әһәмиәтен юғалтмай. "Бәжәнәктәр менән бергә йәшәгән ҡаңнылар ҙа бик ғәйрәтле, уларҙың барыһы ла түгел, ә өс фем халыҡтары ғына", тип яҙған. "Фем" һүҙен мин "фамилия" тип тәржемә иттем. Сөнки фем Византияла ла бар, фэмэли инглиз теленән ғаилә тип тәржемә ителә. Багрянородныйҙың яҙғандарының төрлө бүлегендә, бер нисә урында ҡаңнылар тураһында мәғлүмәт осрай. Мәҫәлән, 37-се бүлектә шундай юлдар бар: "бәжәнәктәрҙең икенсе исеме - ҡаңнылар. Ә был исем уларға шәфҡәтле һәм ҡыйыу булғандары өсөн бирелгән..."

1792 йылдарҙа Ҡытай ҡабат көсәйеп, Хорезм дәүләтенә һөжүм итә, шунда йәшәгән ҡаңнылар бәжәнәктәр менән эске Башҡортостан ерҙәренә күсенә.

**М. СИТДИҠОВ.**

*✓ Беҙҙең атайҙар ауылдан ҡалаға килгән һәм беҙгә, балаларына, олатайҙарҙың рухи мираҫын тапшырған, хәҙер инде беҙ ул мираҫты үҙ балаларыбыҙға тапшырырлыҡ, улар уны ҡабул итерлек мәҙәни майҙансыҡ булдырырға тейешбеҙ.*



# ҠАЛАЛАР БИТ милләттәрҙән яһай

**Элегерәк ауыл халҡы "Ҡаланы маҡта ла, ауылда йәшә", тип әйтергә ярата торғайны. Хәҙер иһә, урбанизацияның яңы этабында, бындай һүҙҙәр ишетелмәй ҙә тиерлек. Илебеҙҙә һәм бар донъяла барған глобаль үҙгәрештәр ауыл халҡын күпләп ҡалаларға йүнәлткән бер ваҡытта шырпы ҡабындай йорттар һәм иҫәпһеҙ-һанһыҙ автомашиналар тарлығынан ялҡҡан ҡаланыҡылар, киреһенсә, ҡала ситенә, тәбиғәткә ынтыла. Хәҙер инде "Ҡаланы маҡта ла, ауылда йәшә", тигән һүҙҙәрҙе күберәк ҡала халҡы әйтә кеүек. Нисек кенә булмаһын, кешелектең ошо ике ауыл-ҡала бүленеше проблемалары һәр заман өсөн дә актуаль булып ҡаласаҡ. Беҙ ошо хәл-күренеште иҫтә тотоп, ҡала, унда йәшәүселәрҙең менталитеты, ҡаланың милли йөҙө һәм мәҙәниәте темаларына диалогтар һәм монологтар серияһы башларға ҡарар иттек. Бисмиллаға, ҡалала тыуып үҫеүсе милли интеллигенциябыҙҙың икенсе быуын вәкилдәренең әңгәмәһен һеҙҙең иғтибарға тәҡдим итәбеҙ. Улар: яҙыусы һәм журналист Зөһрә БУРАҠАЕВА, тарих фәндәре кандидаты Юлдаш ЙОСОПОВ менән социология фәндәре кандидаты Тимур МОХТАРОВ.**

**► Үткән быуаттың 50-60-сы йылдарында беҙҙең илдә лә Европа, Америка модаһына эйәрергә тырышҡан ҡала йәштәре араһында стилягалар күренеше таралып китте. Кейем һәм башҡа төрлө итеп бүтәндәрҙән айырылырға теләүсе был йәштәр ауыл кешеһенән "деревня", "колхозник" тип көлөргә лә яратты, үҙҙәренең ҡалала тыуып үҫеүҙәренең өҫтөнлөгөн ошо рәүешле белдәләргә тырышты. Һуңғы ваҡытта фән донъяһында ла ошондайыраҡ хәл күҙәтелде: ҡалала тыуып үҫкән өс-дүрт ғалим ауылда тыуып үҫкән ғалимдарҙың хеҙмәтен юҡҡа сығарырға маташты. Был хәл баяғы шул стилягалар күренешен хәтерләтте лә инде. Ошо хәлде һеҙ нисек аңлата алаһығыҙ, ниндәй баһа бирәһегеҙ? Аңлауыбыҙса, бында мәсьәлә ҡала-ауыл айырмалығына ғына бәйләнмәгән, бында, иң беренсе нәүбәттә, милләттең хоҡуҡтарын инҡар итеү ҙә, уларҙы танырға теләмәү ҙә бар. Шулай түгелме?**

**Ю. Йосопов:** Беҙ үҙебеҙҙәге ниндәйҙер тарихи күренеште күршеләребеҙҙәге күренештәр менән сағыштырып аңлатырға тырышабыҙ. Иван Грозный Ҡаҙанды яулағандан һуң ундағы барлыҡ төрки халыҡ вәкилдәре юҡ ителә, йәғни татарҙар ул саҡта ҡала этносы булараҡ юҡҡа сыға. Ҡалала ҡалғандары урыҫтар тарафынан ассимиляцияға дусар ителә. Был хәл XVI-XVII быуаттарҙа дауам итә. XVII быуат аҙағында ғына татарҙар Ҡаҙанға яңынан килә башлай.

Ә үҙебеҙгә килгәндә, ни өсөн аҫабалыҡ хоҡуғына эйә булған башҡорттар өсөн ҡалаға килеү ихтыяжы улай уҡ көслө булмаған һуң? Башҡорттарҙың татарҙар һымаҡ ҡалаға эркелеп килмәүенең төп сәбәбе аҫабалыҡ хоҡуғына бәйле. Татарҙы ҡалаға көн итеү ихтыяжы алып килгән. Ҡалаға килгән тәүге быуын башҡорттар, асылда, башҡа милләт вәкилдәре менән ғаилә ҡороп, үҙенең милли үҙенсәлеген юғалтҡан, татарлашыу аша урыҫлашҡан. Мәҫәлән, Өфөлә Бураҡаевтар, Шәкүревтар һымаҡ һирәк ғаиләләр генә үҙенең милилеген һаҡлап ҡала алған. Артабан социаль лифттар, юғары һәм махсус уҡыу йорттары, юлдар һалыныу һөҙөмтәһендә совет дәүерендә башҡорттар ауылдан күпләп ҡалаға ағыла башлай. Хәҙер баш ҡалабыҙ Өфөлә һәм башҡа ҡалаларҙа башҡорт мәҙәни мөхите анклавы барлыҡҡа килде. Күптәр Өфөнөң башҡорт мәҙәниәте үҙәге итеп Башҡорт дәүләт филармонияһын, театрҙарҙы, мәктәп-гимназияларҙы атай. Әммә был объекттар ғына баш ҡалабыҙҙың башҡорт мәҙәниәтен билдәләмәй әле. Мәҙәни мөхитебеҙ беҙҙең социумда, менталь үҙенсәлектә, ҡалаға хас маркерҙарҙа. Ҡала милли мәҙәниәтенең төп күрһәткесе - күмәктән берәүгә, берәүҙән күмәккә туған телдәге мәғлүмәт каналы булыуы. Әгәр ҙә ошо шарт үтәлмәһә, ҡалала милли мәҙәниәт оҙаҡ йәшәй алмай. Мәҫәлән, беҙҙең атайҙар ауылдан ҡалаға килгән һәм беҙгә, балаларына, олатайҙарҙың рухи мираҫын тапшырған, хәҙер инде беҙ ул мираҫты үҙ балаларыбыҙға тапшырырлыҡ, улар уны ҡабул итерлек мәҙәни майҙансыҡ булдырырға тейешбеҙ. Ошоно эшләй алһаҡ ҡына ҡаланың башҡорт милли мәҙәниәте барлыҡҡа килә һәм йәшәй башлай.

Әлбиттә, беҙ атайҙарыбыҙ тапшырған барлыҡ мираҫты ла ҡабул итә алмайбыҙ, ҡайһылыр өлөшөн ҡалдырабыҙ, сөнки ҡала башҡорто образы ауылдыҡынан ныҡ айырыла. Быының өсөн беҙҙең оло быуын менән ҡапма-ҡаршылыҡ барлыҡҡа килә. Ундай ҡапма-ҡаршылыҡ һәр ваҡыт буласаҡ, шунһыҙ үҫеш тә юҡ.

Башҡорттар ҡала милләте булып формалашып бөтмәгән, тигән фекер төптө дөрөҫ түгел. Был - дошман һүҙе. Беҙ күптәнән үҙ милли мәҙәниәте булған ҡала милләте. Уның дәлиле - үҙ туған телебеҙҙә һөйләшеүсе, ижади һәм ғилми эш алып барыусы беҙҙең быуын вәкилдәре. Хәҙер инде беҙ үҙебеҙҙең балалар аша ошо эстафетаны артабанғы быуынға тапшырырға тейешбеҙ - быныһы инде иң төп бурысыбыҙ.

**Т. Мохтаров:** Хәҙерге ҡала башҡорттары араһында ике төрлө ынтылыш, ике төрлө күренеш бар. Береһе уның дөйөм ҡала стихияһына бирелеп, манҡортлаша, икенсеһе рухи-мәҙәни ҡиммәттәрҙе барлап, йола-традициялар нигеҙендә йәшәргә ынтыла. Беренсе төркөмгә ҡараусылар ксенофобия менән сирләй, икенселәре иһә, киреһенсә, халҡының тарихи үткәне менән ғорурланып йәшәй. Юлдаш менән килешәм, беҙҙең оло быуын менән фекер айырымлығы бар һәм буласаҡ. Беҙ, ҡалала тыуып үҫеүсе башҡорттар, ололарса фекер йөрөтмәүебеҙ менән милләтебеҙгә зыян килтерәбеҙ тип уйламайым. "Башҡорт халҡының тарихы" күп томлығында ҡатнашыусы беҙҙең һымаҡ йәш бер ғалимдың ҡала башҡортоноң концепцияһын ҡайһы бер оло ағайҙар ҡабул итмәне, хатта оло ғауға күтәрҙе. Йәш ғалим хатта Мәскәүгә китергә мәжбүр булып, унда бер йыл эшләп килде. Бары тик концепцияһы өлкән ғалимдарҙыҡына тап килмәгәне өсөн генә ул шундай хәлгә ҡалды. Уның концепцияһы башҡорттарҙы һис кенә лә кәмһетмәй, киреһенсә, унда беҙҙең тарихҡа ҡарата яңыса ҡараш сағыла ине. Минеңсә, был концепция күп томлыҡта сағылыш тапһа, ҡыҙығыраҡ булыр ине.

**► Уның концепцияһының төп фекере нимәгә ҡайтып ҡала һуң?**

**Т. Мохтаров:** Уның концепцияһы милләт дәүләтселегенә ҡала күҙлегенән генә ҡарауға ҡоролмағайны. Бындай концепция беҙгә көнбайыш дәүләттәрҙән бермә-бер күсерелгән, ә беҙҙең дала йәмәғәтселегенә нигеҙләнгән дәүләтселегебеҙ формаһы бөтөнләй башҡаса. Әгәр ҙә далалағы дәүләттең башлығы булған хан бөгөн - бер урында, иртәгә икенсе урында йөрөһә, ниндәй ҡәлғә-ҡала тураһында фекер йөрөтөргә була һуң? Беҙгә хатта башҡаларса фекер йөрөтмәгәндәрҙе генә түгел, хата ҡараштa булғандарҙы ла ситкә тибергә ярамай. Ни өсөн тигәндә, тик бер төрлө генә фекер йөрөткән йәмғиәттә үҫеш булмай. Милләтебеҙҙең ҙур өлөшөнөң татар милләтенә күсеүендә лә өлөшләтә ошо сәбәп бар, минеңсә. Урыҫ телле башҡорттарға ҡарата ла ситләтеү ҡарашы йәшәп килә. Башҡорт йәмғиәте үҙенекен ситкә тибеүгә ҡоролған бындай менталитеттан ҡотолорға тейеш.

**З. Бураҡаева:** Хәҙер ҡаланың башҡорт йәштәре арыу ғына көсәйҙе. Дөрөҫөн әйткәндә, дәүләт учреждениелары - үҙ тормошо, башҡорт йәштәре береккән ижтимағи ойошмалар үҙ тормошо менән йәшәй. Йәштәр, өлкәндәрҙән айырмалы рәүештә, чиновниктарҙың ауыҙына ҡарап ҡына тормай. Хәҙер ололар шуны аңлай бара: заман үҙгәрә, 75-80 йәштә әүҙем булып булмай һәм теләһә-теләмәһәләр ҙә, заман дилбегәһе беҙҙең ҡулға күсә. Беҙ оло быуындан кемделер ҡабул итәбеҙ, кемделер - юҡ, сөнки беҙҙең үҙебеҙҙән оло булған өсөн генә кемдеңдер дөрөҫ булмаған принцибын ҡабул итеп йәшәргә теләгебеҙ юҡ. Хәҙер ололар менән йәштәр араһындағы тәбиғи аралашыу процесы юғала бара. Салауат заманында ла, Әхмәтзәки Вәлиди заманында ла шулай булған. Ваҡытында Рәми Ғариповтар быуыны ла үҙҙәренән алдағы бер быуынды ҡабул итмәй, төшөрөп ҡалдырған һәм был мәғлүмәтте беҙгә тапшырған. Ялған фән, ялған әҙәбиәт киләсәктә йәшәй алмаясаҡ. Эйе, өлкәндәрҙең том-том китаптары бар, әммә макулатура тигән төшөнсә лә бар.

**► Бер ҡәүемдең йәштәре аҡһаҡалдарынан үлгән кешеләрҙе терелтә торған тылсымлы һүҙҙе отоп алырға теләгән. Аҡһаҡал ҡаршылашҡас, йәштәр уны ҡурҡытып, теге һүҙҙәрҙе әйттереп алыуға өлгәшкән. Шунан һуң йәштәр сүллек буйлап киткән. Юлдарында тауҙай өйөлөп ятҡан һөйәктәрҙе күреп, теге тылсымлы һүҙҙәрҙе әйтеүҙәре булған, һөйәктәр бүреләргә әүерелеп, йәштәрҙе ашап бөтөргән. Быны ни өсөн һөйләйем һуң? Ҡала комфортына ынтылыу шул тылсымлы һүҙ кеүек мауыҡтырғыс, ылыҡтырғыс, шул уҡ ваҡытта уның мәҙәниәтте, телде, рухиәтте бүре кеүек өҙгөләү, йотоу халәте лә бар. Ҡалалар бит милләттәрҙән винегреттар яһай. Шулай түгелме?**

**З. Бураҡаева:** Ҡалала йәшәүсе йәш кеше бойондороҡһоҙ, ауылдыҡына кемдеңдер ихтыярына буйһоноу психологияһы хас. Әммә хәҙерге ҡала башҡорто менән ауыл башҡорто тигеҙләшеп бара. Шуға күрә мин ошондай бүреләр менән булған хәлдәй ҡурҡыныс барлығын тоймайым. Минең өсөн хәҙер ауыл-ҡала бүленешенән бигерәк, ҡулынан эш килгән йә килмәгән йәштәр бүленеше генә тороп ҡала бара. Был, минеңсә, милләтебеҙҙең ҡаланыҡы булып формалашып бөтөүе күрһәткесе. Хәҙер хатта төпкөл ауылдарҙа ла 2-3 йәшлек балалар үҙ-ара скайп аша аралаша. Хәҙер кейемдә лә айырма тойолмай. Элек БДУ тирәһендә йөрөһәң, кейем буйынса ла, атлап йөрөштәре буйынса ҡалаға абитуриенттар килеүе һиҙелә торғайны. Хәҙер бит был һиҙелмәй.

**► Ҡала ҡатнаш никахтарҙы арттырыуға булышлыҡ итеүен дә әйтеп үтергә кәрәктер...**

**З. Бураҡаева:** Әсәйемдәр заманында шулай булған: әгәр ҙә ауылдан килеүсе йәш башҡорт егете йә ҡыҙы үҙ милләтендәге кеше менән ғаилә ҡорһа, ул хатта ҡалаға килмәгән кеше булып иҫәпләнгән икән. Ә инде ҡалала тыуып үҫеүсе башҡа милләт вәкиле менән ғаилә ҡороу мәртәбә, күкрәккә тағылған миҙал кеүек булған. Был хәл элек шулай булһа, хәҙер икенсе бер тенденция күҙәтелә: ул да булһа, башҡорт ҡыҙҙарының Европа йә Америка егеттәренә кейәүгә сығыуы. Иҫәнғолда бер матур башҡорт ғаиләһенән сыҡҡан ҡыҙ Америка баптисына кейәүгә сыҡҡан. Күрше-күләндәре, туғандары ҡыҙҙың шундай кейәүгә сығыуын ҙур ҡаҙаныш итеп билдәләй икән. Был - ҡаҙаныш түгел, ә ғәрлек. Хатта шул ҡыҙ менән Иҫәнғол мәктәбендә осрашыу ойоштороғандар. Америка кейәүе осрашыуға килә алмаған, әммә кәләше аша бер плакатҡа ҙур итеп ҡултамғаһын ҡуйып ебәргән. Шул ҡултамғаны видеокамераға төшөрөп халыҡҡа күрһәткәндәр, йәнәһе, американлы төпкөлдәге Иҫәнғол халҡына сәләм ебәреп ята. Төрөккә кейәүгә сығыусы башҡорт ҡыҙҙары ла күп. Беҙ динебеҙгә ҡайтабыҙ, әммә дин аша йотолабыҙ. Бөгөн, мосолман, тип, төрөккә, ғәрәпкә, татарға, әзербайжанға кейәүгә сығыу хуплана.

**Т. Мохтаров:** Ҡатнаш никахтар бер ваҡытта ла беҙҙең файҙаға түгел, сөнки унда һәр ваҡыт башҡорт позицияһы бушаҡ булыусан. Был беҙҙең милләттең менталитетына ла бәйле. Хәҙер бар донъя йәмәғәтселеге ҡатнаш никахтарҙан баш тарта, сөнки ике ҡандан тыуған балаларҙа психик ауырыуҙар күберәк осрай. Элегерәк ике милләттән тыуған балалар матур, аҡыллы була, сөнки бындай балалар ике милләттең дә яҡшы сифаттарын ҡабул итә, тигән фекер йыш яңғырай ине. Был - миф, сөнки ундай балалар ике милләттең дә тик кире сифаттарын үҙенә һеңдерә икәнен фән күптән раҫланы. Мәҫәлән, Америкала, индеец менән африканлынан тыуған баланы шундуҡ төрмәгә бикләү яҡшыраҡ, тиҙәр. Уларҙы самбо тип атайҙар. Бер ниндәй ҙә әхлаҡ нормаларына һыймаған самболар Америка йәмәғәтселеге тарафынан ҡабул ителмәгән. Улар индеец та, африканлы ла түгел, ғөмүмән, бер кем дә түгел. Беҙ Америка үткән метизизация бәләһенән әле саҡ үтәбеҙ. Америка бөгөн ҡатнаш никахтарҙан баш тарта, ә беҙҙә әле бындай никах хуплана.

**Ю. Йосопов:** Ҡатнаш никах мәсьәләһе әле генә күтәрелмәй. Минеңсә, ҡатнаш никахтарҙан тыуған балаларҙың беҙҙең милләтте ҡабул итеүе йә итмәүе уның ниндәй ғаиләлә, ниндәй мөхиттә үҫеүенә бәйлелер. Бала үҙен ике милләттең вәкиле итеп тоймаһын өсөн дә бер мөхиттең генә йоғонтоһо көслө булырға тейештер. Мәҫәлән, башҡорттарҙың ҡалмыҡтар менән һуғышы осоронда күп кенә башҡорттар ҡалмыҡ ҡыҙҙарын кәләш итеп алған. Иң тәүҙә уларҙы әсирә итеп алғандар, аҙаҡ өйләнгәндәр. Ошо рәүешле башҡорттар араһында ҡалмаҡ аралары барлыҡҡа килгән. Беҙгә хәҙерге ваҡытта ҡатнаш никахтарҙан арыныр өсөн ысын ир-аттар кәрәк. Әгәр ҙә ауылдарҙа ысын ир-аттар күберәк булһа, ҡыҙҙарыбыҙ ситкә лә китмәҫ һәм, Иҫәнғолдағы һымаҡ, халыҡ ҡайҙалыр Америкала

йәшәүсе баптистың ҡултамғаһына ҡарап, ауыҙ һыуы ҡоротоп та ултырмаҫ ине.

**▶ Ҡала милли мәҙәниәте тигәндә, ысынында, Рәсәйҙәге бер халыҡтың да ҡала милли мәҙәниәте юҡ, бында, бәлки, милли мәҙәниәттең элементтары хаҡында һүҙ алып барырға кәрәктер. Урыҫтарҙы алайыҡ. Бөгөн беҙ Рәсәй ҡалаларында урыҫ ҡала мәҙәниәтен түгел, урыҫ телендәге социализм осоронда нигеҙләнгән барлыҡ халыҡтарҙың дөйөм аралашыу даирәһен күрәбеҙ...**

**Ю. Йосопов:** Ҡала милли мәҙәниәтендә тел мәғлүмәт тапшырыу вазифаһынан тыш, мәҙәниәттең үҙен дә тәшкил итә. Урыҫтар, мәҫәлән, мәҙәниәттәре бармы-юҡмы, ҡалала йәшәй ала.

**Т. Мохтаров:** Минеңсә, ҡала ерендә милли мәҙәниәт барыбер ҙә телдән башлана. Тел мәҙәнитенә аралашыу һәм ижад итеү шарты инә. Тел ҡалала үҙенә генә хас мөхитте һәм мәҙәниәтте барлыҡҡа килтерә. Әгәр ҙә беҙ башҡорт милләте мәҙәниәте һәм милләт яҙмышы тураһында урыҫ телендә һүҙ алып барабыҙ икән, был инде субкультура тип атала.

йәғни беҙ хәҙерге мәҙәни-тарихи мәғлүмәтте ейән-ейәнсәрҙәребеҙгә алып барып еткерә алабыҙмы-юҡмы? Беҙ бөгөн өлгөлә итеп күргән "Тамыр" телерадиостудия балалары киләсәктә үҙ яҙмыштарын милләтебеҙгә бәйле рәүештә ҡороп, ысынлап та, өлгөлә була алырмы? Беҙ әле үк уларҙың күбеһенең өлгөлә була алмауын күрәбеҙ.

Атайым иҫән саҡта беҙ дүрт бүлмәле фатирҙа йәшәнек. Бер бүлмәбеҙҙә һәр ваҡыт ауылдан килеп, яңы өйләнешеп, йәшәргә урындары булмаған йәш башҡорт ғаиләләре йәшәне. Шул ғанеште башҡортса булғаны өсөн генә яҡшы итеп ҡабул итеп өйрәнгәнбеҙ.

**▶ Маргиналдарҙы психология фәндәре докторы Вадим Сафин бер юлы ике кәмәгә баҫып йылға буйлап китеп барыусылар менән сағыштыра. Улар бер юлы ике кәмәгә баҫып китеп бара һәм дауыл ҡубып, саҡ ҡына һыу сайҡалдымы, һыу эсенә ҡолап төшәләр, йәғни улар үҙҙәренең аяҡ аҫтында тупраҡты тоймаусылар. Улар, урыҫтар әйтмешләй, ит тә, балыҡ та түгел. Ҙур кимәлдә алғанда, беҙ барыбыҙ ҙа беҙ ауылда аҙыҡ-түлек етештереү өсөн кеше аҙ талап ителә, тип кенә үҙебеҙҙең тамырҙарҙан үҙебеҙ теләп баш тартырға тейеш түгелбеҙ", - тип уға ҡаршы төшә. Һеҙҙеңсә, ошо фекерҙең араһында алтын урталыҡты табып буламы?**

**Т. Мохтаров:** Минеңсә, бар халыҡты ауылдан ҡалаға алып килгән осраҡта ла, хәл ыңғай яҡҡа үҙгәрмәйәсәк. Был осраҡта беҙ тамырҙарыбыҙҙан айырылаҫаҡбыҙ. Хәҙерге ауылда йәшәгән кешене ҡалаға алып килһәк, уларҙың күбеһенә урам һепереүсе

ма күсеп сығырға ла баҙнат итмәйем.

**З. Бураҡаева:** Миндә лә ауылға ҡарата "дачная психология" йәшәй. Мин унда ял итергә генә ҡайта алам, йәшәргә түгел.

**▶ Беҙҙең милләт туғанлыҡ менән көслө. Ауыл бөгөн туғанлыҡ принцибы буйынса йәшәй, ҡалала иһә, күршелек принцибы. Тимәк, ауылдан ҡалаға килеүсе кеше иң беренсе нәүбәттә туғандарынан айырылыу тойғоһо кисерә...**

**Т. Мохтаров:** Беҙгә был йәһәттән ҡаҙаҡтарҙы өйрәнергә кәрәк. Уларҙа ла шундай уҡ урбанизация процесы бара. Әммә ҡалала йәшәүсе ҡаҙаҡтар ауылдарҙа йәшәүселәр араһынан үҙҙәренә ярашлы кешене табып, уға матди яҡтан ярҙам итеп, унда үҙҙәренең һарыҡ көтөүен йә йылҡы өйөрөн булдыра икән. Ҡыҫҡаһы, улар ошо юл менән үҙҙәренең тукланыу мәсьәләһен хәл итә.

**З. Бураҡаева:** Алма-Ата ҡаҙаҡтары, мәҫәлән, үҙҙәрен "асфальт ҡаҙаҡтар" тип атап йөрөтә. Улар тел белмәй, ҡаҙаҡ ҡыҙҙары күпләп сит милләт вәкилдәренә кейәүгә сыға. Ҡала ҡаҙаҡтары ҡаҙаҡса һөйләшеүҙе наҙанлыҡҡа



# ЛӨҒӘТТӘРҘЕ ҠУШЫП,

## винегреттар...

Ҡалала башҡорт милли мәҙәниәте башҡорт телендә аралашыу мөхите булған урында ғына тойола. Әйтәйек, мин өйҙә үҙ телемдә аралашам, унда милли мәҙәниәт мөхите бар, урамға сығып, төрлө телдәрҙәге яҙыуҙарҙы, башҡа телдәге аралашыу мөхитен тойһам, ул мәҙәниәт юҡҡа сыға.

**Ю. Йосопов:** Минең башҡортса ла, урыҫса ла яҡшы һөйләшкән, ике телде лә тәрәндән тойған апайым бар. Ул оҙаҡ йылдар башҡорт әҙәбиәтен уҡып-уҡып килде лә, хәҙер башҡортса китап уҡымай башланы. Үҙе аңлатыуынса, ул башҡорт китаптарынан үҙе өсөн бер нәмә лә ала алмай хәҙер.

**Т. Мохтаров:** Мин дә хәҙерге ваҡытта башҡорт телендәге китаптар араһынан Мәрйәм Бураҡаеваның "Арғымаҡ" китабын, ваҡытлы матбуғат араһынан "Киске Өфө" гәзитен уҡығанда ғына күңелемә диалог табам.

**▶ Һеҙ әйткәндәрҙе дөйөмләштереп, шундай һығымта яһарға булалыр: милләттең ҡала мәҙәниәтле булыуы шул милләттең тәбиғи юл менән ойошҡан үҙ телендәге интеллектуаль йәмғиәте зарурлығында...**

**З. Бураҡаева:** Һинең рух кимәлең балаларыңда түгел, ейәндәреңдә сағыла, ти әсәйем. Беҙҙең милләт киләсәккә ейән-ейәнсәрҙәребеҙ үҙ милләтебеҙ вәкилдәре менән етәкләшеп барған саҡта ғына үтә ала. Был - аксиома. Беҙҙең бөгөн ҡала мәҙәниәте бармы-юҡмы, был бер 15-20 йылдан асыҡ күренәсәк, иләләр үҙҙәренең фатиры булып, балалары ҡаланың башҡорт мәктәбендә йә гимназияһында уҡыты, һуңынан ул балаларҙың ҡайһы берҙәре сит милләт вәкиле менән ғаилә ҡорҙо. Уйлап ҡараһаң, уларҙың ата-әсәһе үткән ауырлыҡтар, балаларын уҡытырға, кеше итергә тырышыуҙар бушҡа сыҡҡан була бит, сөнки сит телдә һөйләшкән ейән-ейәнсәрҙәр - ул бушҡа уҙған ғүмер билдәһе лә инде.

**▶ Беҙҙә тағы ла сәхнәгә милли кейем кейеп сығып бейеүҙе, йырлауҙы, ҡурай тартыуҙы мәҙәниәт үҫеше тип ҡарау бар. Минеңсә, мәҙәниәт үҫеше интеллектуаль тәрәнлектәлер...**

**З. Бураҡаева:** Беҙҙең мәҙәниәт һәм сәнғәт әһелдәренең күбеһендә "башҡорттар өсөн бара ул" тигән тенденция бар. Был манҡортлашҡан башҡорттар яғынан әйтелгән һүҙ. Улар ошо мөхиттә йөрөй, уны файҙалана, шунан туклана, үҙенең йәшәү сығанағын тәьмин итә һәм шул уҡ ваҡытта башҡорт мәҙәниәтенә һәм сәнғәтенә икенсел итеп ҡарай. Ҡыҫҡаһы, бөгөн ҡала башҡорт мәҙәниәтен тап маргиналдар боҙа. Улар тыуҙырған сәнғәт тә башҡорт сәнғәте түгел, ә маргинал сәнғәт. Улар үҙҙәренең балаларын иһә башҡорт милләте сәнғәте нигеҙендә тәрбиәләмәй.

**Ю. Йосопов:** Беҙҙә бөгөн тәнҡит юҡ һәм бар нәмәне абруй, статус хәл итә. Беҙ, башҡорттар, әле үҙебеҙҙең сәнғәтте һәм мәҙәниәтте тәнҡит күҙлегенән ҡабул итеп өйрәнмәгәнбеҙ. Беҙ башҡортса яңғыраған һәр күре**ике дәүер, ике ижтимағи ҡоролош, ауыл менән ҡала, ике төрлө цивилизация араһында торосус, урталыҡтағы маргиналдар. Минеңсә, ысын мәғәнәһендәге башҡорт мәҙәниәте, сәнғәте һәм әҙәбиәте дәүләттән бойондороҡһоҙ нәшриәттәребеҙ, театрҙарыбыҙ һәм уҡыу йорттары, йәғни буржуазия синыфыбыҙ аяҡҡа баҫҡас барлыҡҡа киләсәк. Был осраҡта тәнҡиткә лә, ирекле үҫешкә лә, ысын мәғәнәһендәге башҡорт ҡала мәҙәните үҫешенә лә нигеҙ булыр ине. Шулай түгелме?**

**Т. Мохтаров:** Минеңсә, беҙҙең башҡорт ҡала мәҙәниәте урынын башҡорт субкультураһы яуларға тейеш түгел. Әйтәйек, ҡаланың башҡорт гимназияһында балалар бары тик башҡорт теле һәм әҙәбиәте дәрестәрендә генә үҙебеҙҙең телдә аралаша. Башҡа барлыҡ фәндәр, тәнәфестәге аралашыуҙар урыҫ телендә бара.

**Ю. Йосопов:** Әгәр ҙә милли рухи нигеҙебеҙҙе тәшкил иткән ауылдарыбыҙ йәшәһә, ҡаланың бындай субкультураһы ла әллә ни ҡурҡыныс булмаҫ ине. Хәҙер бит ауылдарыбыҙға ҡурҡыныс янай. Бөгөн ауыл емерелә. Был яҡшыға түгел.

**▶ Гәзитебеҙҙең быйылғы 14-се һанындағы әңгәмәлә ҡатнашыусы ғалимдар ауыл-ҡала мәсьәләһе буйынса ике төрлө фекер әйтте. Әңгәмәлә ҡатнашыусы Ҡадир Мәғәфүров: "Беҙ бөгөн башҡортто ауылда ҡалырға өгөтләргә тейеш түгелбеҙ. Килһендәр ҡалаға, һис юғы, урам һеперһендәр, таксист булһындар", - тиһә, икенсе әңгәмәсе Зифҡәт Сәйетғәлиев: "Ауыл - милләтебеҙҙең сәңгелдәге. Шуға күрә**

булып эшләргә тура киләсәк. Беҙ бынан нимә отабыҙ һуң? Был аҙым маргиналдарҙың һанын ғына арттырасаҡ.

**Ю. Йосопов:** Египетта булған саҡта мин ундағы ғәрәптәрҙең тормошон күҙәттем. Уларҙың эске тормошонда ҡот оскос хаос хөкөм һөрә. Әгәр ҙә беҙ ауыл халҡын күпләп ҡалаға күсерһәк, шундай уҡ хаосҡа юлығыуыбыҙ бар.

**Т. Мохтаров:** Бөгөн беҙҙең ҡала башҡорт йәштәре күп йәһәттән ауыл кешеләренә өлгө күрһәтә. Бына мин, мәҫәлән, ғаиләм менән ауылға ҡайтһам, көләшем һәм улым менән башҡортса һөйләшһәм, ауылдағылар беҙгә: "Һеҙ алыҫтағы Өфөнән ҡайтһағыҙ ҙа, башҡортса һөйләшәһегеҙ, ә бына кәртә артындағы Магниттан ҡайтҡандар урыҫса һөйләшә", - тип үҙҙәренең ғәжәпләнеүен белдерә.

**З. Бураҡаева:** Хәҙерге көндә башҡорт мөхитенә иң күп маргиналдар биргән урын - район үҙәктәре. Улар ауыл кешеһенән үҙен юғары һанай, шул уҡ ваҡытта үҙҙәре ҡала кешеһе лә түгел. Тап ошо район үҙәктәрендә йәшәүселәр ер һата. Бөгөн беҙгә ауылда йәшәгән кешене үҙен икенсе сортлы итеп тойоу тойғоһонан арындырырға кәрәк. Шуға күрә лә ҡалаға килеп уҡыуын бөтөрөп, ауылға ҡайтҡан йәш кеше йыш ҡына үҙен "икеле" алған уҡыусылай тойоп йөрөй.

**Ю. Йосопов:** Күп кенә кешеләр ауылға ярҙам итергә теләп, "народничество" хәрәкәтендәге кеүек, тыуған ауылдарына китеп ҡараны, әммә улар унда оҙаҡ тора алманы. Әллә ҡалала тыуып үҫкәнгәме, ауыл беҙгә ят һымаҡ. Мин бына хатта Әлкәләге йорто-

тиңләй, исемдәрен үҙгәртә. Әйтәйек, Әнүәр икән - Алян, Гөлниса икән - Гука, Ләззәт икән - Ляска. Ҡаҙаҡтарҙың был хәленә беҙгә ғибрәт итеп ҡарарға кәрәктер. Әммә уларҙың өлгө итеп алырлыҡ яҡтары ла бар. "Булачак", беҙҙеңсә "Киләсәк" тигән программа буйынса улар массалы рәүештә ҡаҙаҡ йәштәрен Европаның алдынғы уҡыу йорттарына уҡырға ебәрә. Ҡаҙаҡ кешеһе өсөн Мәскәү, Санкт-Петербург юғары уҡыу йорттарына инеү түбән баҫҡыс һанала. Хәҙерге ваҡытта был программа буйынса уҡып ҡайтыусылар Назарбаев етәкселегендә дәүләт органдарында эшләй.

**ШУЛАЙ ИТЕП...**

*Баҙарҙарҙа йыйын*
*әтрәгәләм,*
*Урамдарҙа тулы иле юҡтар.*
*Ҡалалар бит лөғәттәрҙе*
*ҡушып,*
*Милләттәрҙән яһай*
*винегреттар,*

**тип яҙғайным үҙемдең "Ҡалаларҙың ғәҙәттәре сәйер..." тигән шиғырымда. Үкенескә күрә, ҡалаларҙың ауылдарҙы ғына түгел, милләттәрҙе лә йотоу халәте бар шул. Шул уҡ ваҡытта ил сәйәсәте ҡалала башҡарыла, кешене оло донъяға алып сығыусы белем һарайҙары ла, дәүләт һәм милләт институттары һәм атрибуттары ҡалала урынлашҡан. Эйе, милләтебеҙ тамырҙары, уның сәңгелдәге ауылдарҙа, тимәк, ауылдарҙы ла һаҡлау фарыз беҙгә. Ҡаланы маҡтайыҡ та, ауылда йәшәйек, ауылды маҡтайыҡ та... ҡалала йәшәйек, туғандар!**

**Әхмәр ҒҮМӘР-ҮТӘБАЙ**
**әңгәмә ҡорҙо.**

✓ ***Дәрестәр әҙерләп, онотолоп дәфтәр тикшереп ултырып, ҡыҙ һуңлайһы урынға осрашыуға ул һуңлағайны, баҙарын төшөрөргә теләмәгән ҡыҙ сыпраңланы ла китте. Төптәнерәк уйлап ҡараһаң, ул да булдымы инде үпкә?***






Хәйҙәр ТАПАҠОВ

# ТУЙ ДАУАМ ИТӘ

Хикәйә



Был хаҡта ишеткән Әлфиә аптырап бот сапты:

- Нисек була инде был, бейем, сиркәүгә барып суҡынырға тейешбеҙме тағы? Аҙаҡ ауылдаштар күҙенә нисек ҡарарбыҙ?

- Өндәшмә, - тип ыҫылданы Ғәлиә. - Берәй сәғәткә юғалып тороуыбыҙҙы кем күрә лә кем белә? Бер тапҡыр суҡыныуҙан берегеҙҙең дә уҡаһы ҡойолмаҫ, мәсет тә, сиркәү ҙә - икеһе лә Алла йорттары, ҡайһыныһына барып табынһаң да барыбер түгелме ни?

- Ҡунаҡтарҙың күңелен ҡыймайым тип, тәрегә табынайыҡмы инде, бейем? Улайһа, әйҙә, заманса ҡыландырайыҡ, мәсетенә лә, сиркәүенә лә бармайыҡ. Һеҙ суҡынып ҡына китегеҙ, ә мин бында ҡалам, аш-һыу тирәһен ҡараштырырға ла кеше кәрәк бит әле.

- Күршең һуҡыр булһа, күҙеңде ҡыҫ, тигән мәҡәлде ишеткәнең бармы? Барыһың, мин әйткәс, Рәмилде ҡултыҡлап иң алдан юрғаларһың!

Ары һүҙ көрәштерергә теләмәгән килен башын баҫып китеп барҙы. Туй мәле етеүгә, ауыл ҡунаҡтары күренгеләй башланы. Түшен тултырып орден-миҙалдарын тағып алған Ғиндулла ҡарт яҡындарын эйәртеп, тәүгеләрҙән булып килеп инде лә, кимәл һаҡлап, һәммәһе менән күрешкәс, түр яҡты биләне; иң башта төп ҡоҙа менән абруйлы ғына әңгәмәләште, шунан кесерәктәренә күсте: "Ғилманға саҡырылһаң да, ауыл осонда йәшәйбеҙ, башта юл ыңғайы миңә һуғылырға тейеш инең", - тип, Уйылдан ҡустыһын еңелсә ҡыҙҙырып алды. Улы, кейәүе урындар-ын белеп, ситкәрәк тартылды, ҡыҙы менән килене ярҙамлашырға тип, алъяпҡыстар быуып алып, ҡаҙанлыҡ яғына йүнәлде. Ары ҡатындарын эйәрткән мәктәп директоры Нур Талипович, хакимиәт башлығы Ибраһим Ғәлимйәнович күренде. Улар ҙа Ғиндулла ҡарттың эргәһенә ҡунаҡланы.

Саҡырылғандар йыйылып бөткәс, Ғилман ҡайҙа ултырырға белмәй аптыранышып ҡалғандарҙы йәштәренә, дәрәжәләренә яраҡлы урынлаштырҙы. Йәштәр өсөн ишек алдынында ҡупшы сатыр эшләнгәйне. Мәжлес ҡыҙған мәлдә уларҙың өҫтәлдәрҙе бутап, өлкәндәр яғына сығып ҡаңғыртасаҡтары көн кеүек асыҡ, ни хәл итәһең, ихатанан ситкә ҡыуып сығарып булмай бит. Ҡап уртала күңел асыу өсөн таҡтанан иҙән түшәлгән. Муйындарына ҡыҙыл таҫма бәйләнгән шешәләр шауҙырлаған йәшниктәрҙе ике еңгә бейей-бейей индергәс, ошоғаса ҡорт күсендәй геүләгән табын дәррәү сәпәкәй итеп ебәрҙе: "Көрәгә килә, көрәгә, бәрәкәт!" - тигән ауаздар ишетелде. Ғилман туйҙы асҡандан һуң, исем-шәрифтәрен әйтеп, туғанлыҡ яғын аңлатып-төшөндөрөп, яҡындары менән таныштыра башланы. Ҡала ҡунаҡтарына был ҡыҙыҡ та, мөһим дә түгел ине шикелле, битараф йөҙҙәрен төмһәртеп, ҡасан бөтөр был, тигән ҡиәфәттә ултыралар, бәғзеләр ашҡа хуш биргәнде лә көтмәй һалып эсеп ебәреп, ашауға йомолдо. Ә егеттең атаһы барлауҙы ла кәрәк һанамай, ҡоласын ғына йәйҙе: "Вот они, мои! Давайте, выпьем за всех нас!" Беренсенең төбөндә ҡалдырырға ярамағанлыҡтан, таҙа итеп йотоп ҡуйҙылар, шунан өй хужаларының һаулығына, ары туйҙың матур үтеүен теләп күтәрҙеләр. Рюмкалар бушаған һайын йөҙҙәр алһыуланды, телдәр сиселде, баштағы тартыныу юҡҡа сыҡты.

ЗАГС-тан һуң Васильевкаға елдерҙеләр. Был хаҡта артыҡлап шауламаһалар ҙа, юлдарында осрағандар уларҙың ҡырын сәфәргә сығыуын һиҙемләне шикелле. Милләттәр, диндәрҙең һәммәһе тигеҙ, һәммәһе айырым ихтирамға лайыҡ, һәр тел, мәҙәниәт үҙенсә гүзәл, үҙенсә ҡабатланмаҫ, әммә ләкин уларҙы айырып тотҡан, береһе икенсеһенә яҡынламаҫлыҡ итеп араларына тартылған күҙгә күренмәҫ шаршау ҙа бар бит әле. Шул сикте ашатлап сығырға ярамай. Ярамай! Ҡан ҡатнашыуы, милләттәрҙең, диндәрҙең буталыуы, маңҡортлоҡҡа һәм динһеҙлеккә килтерә. Ваҡытһыҙлыҡ, быуынһыҙлыҡ тантана итеүе ошомо икән әллә, йәшәйеште бит мәғәнәһеҙ уртасыллыҡ һәм исемле исемһеҙҙәр баҫып бара. Ғилман һылтауын табып, тәмәке тартҡанға һалышып, сиркәүҙең эсенә иң аҙаҡҡа ҡалып инде лә, күңелен баҫҡан шөбһәне еңә алмай, мөйөшкә һыйынды, сөнки бәләкәй саҡтан уҡ тәренән һипһенеү һәм тартылыу аңына һеңгән. Ҡыҙмаса ҡунаҡтарҙың һуҡмыш төбәлеүҙәренән боҫһа ла, видеокамераның объективынан ҡаса алманы, ирештергәндәй, яҡындан да, китә биреп тә, сүгеп, аҫтан өҫкә ҡаратып та уны видеоға төшөрә башланылар. "Сәсрәп кенә китегеҙсе, мәйелегеҙ, маташтырығыҙ әйҙә, һеҙгә бит шау-шыу, шоу кәрәк!" Яурындарын кирә биреп, турайып баҫты. Поптың үтә лә тырышып йоланы атҡарыуын, монашкаға оҡшатып ҡара яулыҡ бөркәнгән ҡатынының иң алға баҫып, тырышып-тырмашып суҡыныуын асы йылмайыу аша екһенеп күҙәтте. Ысынбарлыҡҡа тиҙ яраҡлаша белә шул Ғәлиә, елдең ҡайҙан ҡайҙа табан иҫеүен һә тигәнсе абайлап, шунда уҡ сараһын күрә һалып та ҡуя. Бөгөнгө алыпһатарлыҡтың асылы ла, бәлки, шундалыр, сөнки беренсе урынға мәңгелек ҡиммәттәр түгел, аҡса, килем ҡуйыла, өлөшөн һаҡлап, эргәһендәгеләрҙе тамаҡларға әҙер ас бүреләй өҙлөкһөҙ табыш артынан ҡыуыу әҙәм балаһының йөҙ-фиғелен үҙгәртеп, унан быға тиклем күрелмәгән яңы йән эйәһе - "бүреэт" әүәләй. Ғәлиәһе лә бит бөгөн ана шул аҡсаны Аллалай күргән мөхиттә әйләнә... Юҡ, юҡ, уны һис кенә лә яманларға, кәмһетергә йыйынмай. Өй тирәһен ялт иттереп таҙа тота, ҡара эшкә әрһеҙ, ашһыуға сымры, өҫ-башын әрпеш йөрөтмәй, ә ир-егет өсөн былар аҙ түгел. Йәнә нисә йыл уртаҡ түшәктә арҡа йылытышалар, бер-береһенә эҫенеп, өйрәнеп бөткәндәр. Тик яратамы һуң ул уны? Әйтә алмай... Ундай илаһи хисте Фәрзәнә менән дуҫлашҡанда ғына тәү ҡат кисерҙе: уны күрһә, йәне елкенеп, йөрәге дөбөрҙәп бейеп, асманға атлыға торғайны. Фәрзәнә лә уға наҙлы итеп, үҙ итеп, яратып ҡарай, тойғолары ла саф, хатта үпкәләшеүҙәре лә эскерһеҙ. Ҡыҙ асылып бармаһа ла, Ғилманды ярата ине шикелле, юғиһә, институтты тамамлау менән республиканың төньяҡ райондарының береһендә йәшәп тә, уның йәшәгән районына, хатта ауылына йүнәлтмә алып килмәҫ ине, моғайын. Тик бер кистә ерле юҡтан йөй табып, ҡылтайышты ла ҡуйҙылар. Дәрестәр әҙерләп, онотолоп дәфтәр тикшереп ултырып, ҡыҙ һуңлайһы урынға осрашыуға ул һуңлағайны, баҙарын төшөрөргә теләмәгән ҡыҙ сыпраңланы ла китте. Төптәнерәк уйлап ҡараһаң, ул да булдымы инде үпкә? Үтә ғорур булғанлыҡтан, береһе икенсеһенә яҡынларға һәм ғәфү үтенергә ашыҡманы.

Шул мәлдә генә көткәндәй, шике уртала Ғәлиә пәйҙә булды. Фәрзәнә кис оҙата барып, хушлашҡан саҡта битенән генә үбергә рөхсәт итһә, был ни шундуҡ, ымһыныулы, серле "һыйҙың" мулын һоғондорҙо. Йәш тәндә урғылған теләктән бушанып, ҡырағай дәрте һүрелгәндә рәтләнере рәтләнгән, ҡылыныры ҡылынғайны шул, күлдәк итәге биленән юғары күтәрелгән ҡыҙ бүлмә иҙәнендә ҡул-аяҡтарын йыя алмай, тырпырап ята ине. Шул минутта үкенеүле үртәлеүҙән янған Ғилман уны ваҡ ҡына киҫәктәргә өҙгөсләп ырғытҡыһы килде. Әле генә тәне тартылған ҡыҙ ҡотто осорғос ят һәм һөйкөмһөҙ күренде. Тик ҡатын-ҡыҙҙы ҡул менән түгел, һүҙ менән дә ҡыйырһыта белмәгән егет таш балбалдай һерәйеп тора биргәс, ярһыуынан бүлмә стенаһын йоҙроғо менән төйҙө, уҡтай атылып тышҡа сыҡты, клуб күтәрмәһенән әләгә-йығыла түбәнгә һикерҙе лә, бушлат төймәләрен дә элеп аҙапланмай, кәпәсен ҡулына йомарлап ыжғыр буранға ҡаршы атланы...

Иртәгеһен көнө буйы һәүетемсә мәшәҡәттәр менән булашып, эңер төшөүгә теге, тәүге тапҡыр кисергән тетрәндергес ваҡиғаның йәнде ҡыйған ҡырҙары һиҙелерлек тупарғайны, асыуы тамам баҫылғайны. Клубта бүлмәһе яғына ҡаш һикертеп саҡырыулы йылмайған Ғәлиәне күргәс, аяҡтары араһындағы гонаһ шомлоғо башындағы айыҡ аҡылына буйһонорға теләмәй, кисәгенән дә ғәйрәтлерәк ҡабарып, ҡабаттан теге ләззәтте тәтергә ҡотортто. "Бөгөн генә, һәм... башҡаса барыу юҡ!" Ике көн үтте, өс көн, унан ары... шунан сыға алмаҫлыҡ булып, Ғәлиәнең ҡуйынына батты. Ауыл ерендә бит бер оста сөскөрһәләр, икенсе осонда "Йәрхәмбикалла!" тиҙәр, был хәбәр ҙә бик тиҙ таралды. Тырышып таратыусыһы Ғәлиә үҙе ине. Ғүмере буйы ғәҙел йәшәп, унан өлгө алыуҙарына күнеккән Фазлетдин ҡарт шырпы бөртөгөләй тоҡанып китеп, бил ҡайышына йәбеште, улының уҡытыусылығына ла ҡарап тормай, уңлы-һуллы бәргесләп ташланы һәм өҫтәлгә йоҙроҡлап тондороп, кире ҡаҡҡыһыҙ ҡарарын сығарҙы: "Төшөп ҡалған, арҡыры ятҡанды өйөнә ташыған кибетсе Ҡомаҡ Сәләх менән ҡоҙалашырмын, тип, ике ятып бер төшөмә инмәгәйне, донъя шулай итеп бер алдын, бер артын күрһәтә икән ул, ҡәһәрең! Ҡулың менән эшләгәс, иңең менән күтәрә лә бел, киләһе йомала әйттерергә барабыҙ, ә һин, Сәбилә, күлдәк-яулыҡтарыңды, мәһәреңде әҙерлә!"

Ул өйләнгәс, оҙаҡ та тормай, Фәрзәнә күрше ауылға кейәүгә сығып китте. Осраҡлы ғына урамда тап булышҡайнылар. Фәрзәнә күҙҙәрен моңһоуландырып: "Нимә эшләнең һин, Ғилман, үкенерһең бер килеп..." - тип бышылданы. Үкенгән саҡтары булманы түгел, булды, өйләнешеүҙәренең тәүге йылдарында барыһын күтәреп-бәреп башы һуҡҡан яҡҡа сығып китергә лә йыйынып ҡуйҙы. "Өйләнгәсең-йәшә, беҙҙең тоҡомда ҡатындарын йәберләүселәр, ташлаусылар, айырыусылар булманы һәм булмаясаҡ!" тип ҡырт киҫте ҡырыҫ холоҡло атаһы. Ғилман үҙе лә белә-күрә йөрөй, Ғәлиәһе уның өсөн йән атып, үҙәләнеп бармай, түшәктә сағында ир иркәләүенә ҡәнәғәтһеҙлеген белдереп, бер нисә тапҡыр "башҡалар ише түгелһең", тип тә ыҫҡындырғыланы. Тимәк, ҡатыны уны кем менәндер сағыштыра һәм тегене унан өҫтөн ҡуя. Тәүге тапҡыр ҡушылған мәлдә лә Ғәлиә ни тиклем генә сафлыҡтан яҙыу ролен шартына тап килтерергә тырышмаһын, һиҙҙе - ул ҡыҙ түгел ине. Эсенән һыҙһа ла, был хаҡта бер тапҡыр ҙа һүҙ күтәреп ғауғалашманы, никах бөтөнлөгөн һаҡларға тырышты. Йылдар үтеү менән ғаиләһе ишәйҙе, йәнен өйкәгән ятһыныу, әйтелмәгән, бер тапҡыр ҙа әйтелмәйәсәк үпкә һүҙе икенсе планға күсеп, уның урынына балаларына булған наҙ һәм уларҙы теләһә ниндәй мәлдә лә ҡурсырға ынтылыу тойғоһо ғына тороп ҡалды. Ҡатыны ла кем менәндер сағыштырыуын бөтөнләй онотоп, тормош ғәменә сумды, донъя хәстәренә батты, аҡса хисаплауға әүәҫләнеп алды. Билдәле бер мауығыу икенсеһен бөтөнләй онottора икән шул...

...Килтергән бүләктәрҙе һалыр мәл еткәс, ике яҡтан да вәкилдәр сығарып иҫәпләү комиссияһы тәғәйенләнде. Иң беренсе һүҙ Ғилман менән Ғәлиәгә бирелде. Теге саҡ, әйттерә килгәндәрендә бүләк итеп күпме аҡса һалырға кәрәклекте урата-һуҡтыра белешкәйне лә ул, ҡоҙаһы "Это уже ваши проблемы", тип ҡуйыу менән генә сикләнде. Ауыл ерендә ҡалыр йәштәргә һыйыр һалалар, ғәҙәттә, ә быларға ни ҡылырға икәнлекте ҡатыны менән оҙаҡ кәңәшләшкәндән һуң, һатыуҙан килгән килемде ҡырып-юнып, аҡсалата һалырға иттеләр. Бүләк, үҙҙәренең хисабынса, түңәрәк һәм йөҙгә ҡыҙыллыҡ килтермәҫлек тойолдо. Ғилман тулҡынланыуҙан тамағын ҡырып алды, тағы ла бер тапҡыр ҡунаҡтарын теүәлләгәндәй, ҡарашын өҫтәл буйлап йүгертте. Ғилмандың ҡотлауы ҡыҫҡа, хатта ҡайһылыр кимәлдә ҡоро һәм рәсми килеп сыҡты. Уның ҡарауы, Ғәлиәһе килештерҙе: оҙон-оҙаҡ теләктәрен әйткәндән һуң, барып кейәүен һәм ҡыҙын "әп" итеп алды, кире урынына килеп баҫҡас, күҙен йәшкәҙәтеп, балауыҙ һыға алырға ла онотманы. Иң һуңынан Ғилман пинжәгенең түш кеҫәһенән теге төйөрөм конвертты сығарып, ундағы хаҡты әйтеп, һонолған батмусҡа ырғытты. Туғандары бындай йомартлыҡты көтмәгәнлектән, хуплап, ҡул сабып ебәрҙе. Ҡаланан килгәндәрҙең иҫе лә китмәне. Күҙ ҡырыйы менән шуны ла һиҙҙе: төп ҡоҙаһы мыҫҡыллы йылмайып та ҡуйҙы шикелле.

Бына Иван Васильевич менән Мария Петровна ҡайҡайып ҡалҡындылар. Уларҙың һүҙенең рәтсүрәте булмаһа ла, үҙҙәрен һауалы, эре тотоуҙары күҙгә ташлана. Ҡотлауын тамамлаған ҡоҙа йәштәргә алдан инселәгән фатирҙан тыш, малайына - ҡиммәтле иномарка, ә килененә ҡиммәтле шәшке тун бүләк итеүе хаҡында иғлан итте. Ауылдағылар шаңҡып ҡалды, кемеһелер, быныңса мөлкәтте ғүмер буйы йыйһаң да туплап булмай инде ул, тип телен шартлатты. Ғилмандың кәйефе китте, ғәрсел күңелен "мәсхәрәгә ҡалдыҡ", тигән уй тырнап үтте. Тик түбәнһенеүе алда булған икән әле. Бай ҡунаҡтар береһе икенсеһен уҙҙырып бүләктәрен һала башланы, бындағылар килтергәндәрен сығарырға тартынып, ауыр хәлдә ҡалды. Күпте күргән, кисергән Ғиндулла ҡарттың ғына был ығы-зығыға иҫе китмәне, түрҙә батшалай ҡуҡрайып ултырыуын дауам итте. Бына сират уға ла етте. Ул пинжәген япҡан орден-миҙалдарын сыңлатып тороп баҫты, һүҙ башларҙан әүәл имән ботағылай ныҡ бармағы менән ҡупшы һаҡалмыйығына ҡағылды. Ошоғаса ҡыҙмасаланып геү килгән туй аҙға ғына тынды.

- Балаларым, - тине ветеран йәштәргә мөрәжәғәт итеп, - бөгөн һеҙҙең өсөн иң тантаналы көндә әйтелгән бар теләктәргә инәйегеҙ ҙә, мин дә ихлас ҡушылабыҙ. Байлыҡ - бер айлыҡ, тигәндәй, иң әүәл һеҙгә сәләмәтлек, шунан мөхәббәтле, һөйөүле-һөйөлөүле йәшәү теләйбеҙ!

- Слушай, старик! - Килгәндәрҙең араһынан ала-сола сәсле, бит-йөҙө буяҡтарҙан ғына хасил ҡатын ҡулын болғап сәрелдәне. - Во время взаимного влечения выделяется гормон любви допамин, и этот гормон живет в организме человека в течении 5-6 лет. Исчезает допамин, уходит и любовь. Как врач, заявляю, нет любви на свете, и никогда не было!

- Нина!.. - Эргәһендәге йоҡа кәүҙәле күҙлек кейгән ир бүлдерергә иткәйне лә, был оторо ярһып китте. - Сиди, чурбан несчастный, ты мне надоел как горькая редька! Так что - горько! - Алдындағы аҡ араҡы ҡойолған рюмканы ауыҙына түңкәрҙе лә,

ҡомһоҙ ирендәре менән эргәһендәге ирҙең сикәһенә талпандай ҡаҙалды.

Был әҙәпһеҙ ҡунаҡты бүлдермәй тыңлап бөткән Ғиндулла ҡарт тамағын ҡырып алды:

- Беҙҙең халыҡта йәштәргә "әсе" тип ҡысҡырыу хилафлыҡҡа иҫәпләнә, ҡайны йортона төшкәндә киленгә ҡаршы сығып, бал-май ҡаптыралар, йомшаҡ мендәргә баҫтыралар, былар инде татыу, килешеп йәшәү теләүгә ишара. Ә мөхәббәткә килгәндә, минең фекерем былайыраҡ: ул кешегә һирәк бирелгән һәләт менән бер, кемгә эләгә, ә кемгә - юҡ. Бәс, шулай икән, ер йөҙөндә мөхәббәтһеҙҙәрҙең йәшәүенә лә аптырайһы, ғәжәпләнәһе түгел...

- Дед, ты же ветеран войны, скажи, за кого воевал? - Йәштәр өҫтәле яғынан ҡысҡырҙылар. - Лучше было проиграть эту войну, потому что побежденная Германия и Япония сегодня процветают!

- Беҙҙең ҡотлау ҡотлау булманы, һорауҙарға яуап һымаҡ килеп сыҡты. - Ғиндулла ҡарт көлөмһөрәне. - Шулай ҙа яуап бирәм. Беҙ тыуған ер өсөн, уның азатлығы һәм бойондороҡһоҙлоғо өсөн көрәштек. Дошманға һөжүмгә барғанда күҙ алдымда һәр ваҡыт тыуған ауылым, туғандарым һәм яҡын кешеләрем торҙо, мин уларҙы һаҡлап, уларҙы ҡурсып, дүрт йыл буйы үлемесле яуҙа йөрөнөм. Иманым камил, һәр һалдат ана шул төшөнсәләр өсөн йән аямай алышҡандыр һәм ҡорбан булғандыр. Ошо яуҙа ҡот осҡос юғалтыуҙарҙан тыш, 28 миллионға яҡын кеше башын һалды. Әгәр еңмәһәк, бөгөн бына ошолайтып ултыра алыр инек микән? Юҡтыр. Беҙгә бит Германияның ябай халҡы түгел, ә уның фашистары ҡан дошман ине. Фашизмдың асылын аңлатып тороу кәрәкмәҫ, моғайын да, белемле кешеһеңдер, улым. Немец һәм япондар эшлекле һәм эшһөйәр, беҙгә уларҙан күп нимәне өйрәнәһе бар әле. Ә һин әйткәндәр "Алма беш, ауыҙыма төш", тип көтөп ятҡан, хатта бөгөнгө тыныс көндәрҙә лә ил алдындағы изге бурысын үтәп, армияла хеҙмәт итәһе урынға, ҡасып-боҫоп ятҡан булдыҡһыҙҙарҙың һәм ялҡауҙарҙың идеологияһы! - Көләүҙән табын геү итеп ҡалды. - Йәштәргә теләктәр менән бергә бүләк һалыу тигән күркәм йола ла бар бит әле. Беҙ батмусҡа Ғиндулла ҡарттың бер айлыҡ пенсияһын һалырға ҡарар иттек.

- Сколько получаешь пенсию, старик, назови сумму! - Баяғы хаяһыҙ егет еңелергә теләмәй, бәйләнә бирҙе.

- Күпме тәғәйенләнгән, барыһы ла беҙҙеке, ә уның теүәл хаҡын хөкүмәттән генә барып белеш, сөнки урыны был түгел...

Туй ҡыҙғандан-ҡыҙҙы: ползункиҙың балаҡтарына килем-байлыҡтарына маһайған, береһе икенсеһен уҙҙырырға тырышҡан йомарттар тынҡыслап аҡса тултырҙы, кәләш менән кейәү бейегәндә лә иҙәнгә ауыл халҡының бер айлыҡ эш хаҡы кимәлендә ҡағыҙ аҡсалар осто. Ят ҡорға килеп эләккәндәренә үкенгән ауылдаштар һиҙҙермәй генә таралыша башланы, үҙҙәрен ихтирам итмәгәндәр, кимәлдәрен һанламағандар һәм шешә төбөн күҙләүгә әүәҫтәр генә ҡалды. Табында мәжлестәрҙе йәмләгән ҡурай моңо ла ишетелмәне, йәнде арбар, булмышты сафландырыр оҙон көй һуҙыусы ла, ойота баҫып бейеп күңел асыусы ла булманы. Иҫерек тауыш бөгөнгө мәғәнәһеҙ йәшәүҙең моңһоҙ таҡмағын һамаҡларға тотондо:

*Аҡ кәзә йөндәре,*
*Күк кәзә йөндәре,*
*Эрүмкәләр буш ултыра,*
*Ҡайҙа хәзәйендәре!..*

Түр яҡты биләгән ике йәш ҡатынға етә ҡалды, һеҙ улай булһағыҙ, беҙ былайыраҡ, тигәндәй, кемуҙарҙан элеп тә алдылар :

*С неба звезда упала,*
*Прямо милому в штаны…*

Теге үҙен табипмын, тип таныштырған яһил, тотанаҡһыҙ ҡатындың эсеүе еткәндер, блузкаһын сисеп ташлап, былай ҙа ҡыҫҡа юбкаһын өҫкә тартып күтәреп, күкрәксәгә саҡ һыйған түштәрен бәүелдереп, бот төптәрен ялтлатып өҫтәлгә менеп баҫты. Табынға ҡуйылған һый, ризыҡ ер иҙәнгә һибелде, шауҙырлап ҡашығаяҡ ватылды. Аяғында саҡ баҫып торған ир ауатүнә иҫке өйҙөң ишек тотҡаһына барып аҫылынды ла, уны бар көсөнә һелкетә тартты, тик ҡуш йоҙроҡ дәүмәле йоҙаҡ һалынған ишек ваҡытһыҙ бимазалауҙарына үпкәләгәндәй, арҡыры ҡоршау менән нығытылған тимергә бәрелеп, ауыр сыйнап ҡуйыу менән генә сикләнде. Ә тынсыу өй эсендәге тар карауатта ятҡан Сәбилә ҡарсыҡ был мәхшәрҙе күрмәне лә, ишетмәне лә, ул мәңгелеккә күҙҙәрен йомғайны...

Әллә ҡайҙан килеп сыҡҡан ҡара болот тиҙ арала тотош күк йөҙөн ҡаплап алды. Ауыр шаршауҙы утлы ҡамсыһы менән яландырып, ялт та йолт килеп йәшен йәшнәне, ер һелкетеп, күк күкрәне, мәгәр көткән ямғыр яуманы, ҡорғаҡһыған, дыңғырҙап ҡатҡан, ярғысланған ер өҫтөнән күҙ йәштәреләй эре тамсылар ғына йүгереп үтте. Донъяны япҡан туҙан да баҫылманы, томра һауа ла сафланманы. Ас кешенең ымһыныуын ҡуҙғытҡан аш быуылай таралған танһыҡ ямғыр еҫен, һөткә тулышҡан елендәй ҡабарған болоттарҙы ҡибланан иҫкән ҡыуан ел нисек тиҙ өйөрөп килтерһә, шул етеҙлектә тағы ситкә, офоҡта тимгелләнгән киртләс тауҙар артына ҡыуаланы. Алыҫта, бик алыҫта, ерҙә әле матурлыҡ барлығын, уның әле йәшәйеште ташлап ҡасмағанлығын иҫбатлап, айыҡ аҡыллыларҙы, зиһенлеләрҙе, мөхәббәтлеләрҙе өмөтләндерергә теләгәндәй, ете төҫтә балҡып салауат күпере ҡалҡып сыҡты. Бында урамдағы саңды, сүп-сарҙы күккә ауалатып, баҡса ағастарын, эргәләге урманды шомло шаулатып ҡойон йүгереп үтте. Йылы ямғырға, шифалы дымға сарсаған тәбиғәттә дауыллы ғәрәсәт ҡоторҙо, ә араҡы йылға булып аҡҡан, тотош ауылды яңғыратып иләмһеҙ сит ил көйө аҡырған Хәмитовтарҙың ишек алдында туй мәжлесе дауам итте...

**(Аҙағы).**

АФАРИН!

# РУХ АЗАТЛЫҒЫ...

## "Ҡош юлы"ның хакимы булды

**Һуңғы арала киң йәмәғәтселек, бигерәк тә йәштәр араһында "Ҡош юлы" тип аталған яңы мәҙәни күренеш ҙур ҡыҙыҡһыныу, хатта резонанс тыуҙырҙы. "Ҡош юлы" - гитарала уйнап, башҡортса йырлаусыларҙың тәүге асыҡ республика интернет фестиваль-конкурсы. "Шоңҡар" журналы ойошторған был конкурс өс ай буйы "Бәйләнештә" сайтында барҙы. Фестивалдең йомғаҡлау өлөшө иһә ошо көндәрҙә Ейәнсура районында, тәбиғәт ҡосағында үтте.**




### Гитара - музыка ҡоралы ғына түгел

Нимәһе менән ҡыҙыҡлы һуң был конкурс? Ни өсөн "Ҡош юлы" башҡорт йәштәренең фекер алышыуында иң популяр темаларҙың береһенә әүерелде? Хәйер, ойоштороусылар был һорауҙарға алдан яуап табып эш иткән һымаҡ. Фестивалдең формаль, рәсми булмауы - йәштәрҙе йәлеп итеүҙең төп сәбәптәренең береһелер, моғайын. Беҙҙә күп осраҡта конкурс-фестивалдәр Мәҙәниәт министрлығы тарафынан ойошторола һәм улар контролендә тотола. "Ҡош юлы" иһә үҙ аллы башланып китте, ул үҙ ҡанаты менән осто. Был конкурста һүҙ, моң, көй азатлығы, тимәк, рух азатлығы хакимлыҡ итте. Әлбиттә, конкурсты күҙәтеп барыусылар араһында сәләмәт, нигеҙле тәнҡитләү урынына, ҡатнашыусыларҙың дәртен ҡыйырға маташыусылар ҙа булды. Ләкин конкурсты алып барыусылар быға юл ҡуйманы, һәр ҡатнашыусы үҙе теләгәнсә сығыш яһаны.

Киң таралған музыка ҡоралдары араһында гитара бөгөн тәүге урында торалыр, моғайын. Йәштәр өсөн - ул романтика, рух сығанағы. Гитара моңона йәштәр йыйыла, туплана, күңел аса, гитара моңона дуҫлаша, ҡауыша. Йәғни гитара музыка ҡоралы ғына түгел, ә билдәле бер социаль функция үтәй, кеше тормошо менән тығыҙ бәйләнештә йәшәй. Элек ошо социаль функция ҡурай, думбыра, ә аҙаҡтан гармун өлөшөндә булған. Әммә бөгөн ҡурайҙы профессиональ сәхнәгә күтәргән һайын, уны халыҡтың тормош-көнкүрешенән айыра баралар кеүек. Бөгөн беҙ ҡурайҙы ялтыр тантаналарҙа ғына һайратабыҙ ҙа, кире алтын ситлеккә бикләп ҡуябыҙ. Ғүмер яланында, тормош яуында, ҡылыс кеүек, билгә аҫып йөрөтмәйбеҙ уны хәҙер. Ҡурайҙы сәхнәгә күтәрергә кәрәк, әммә халыҡтан да айырырға ярамаҫ ине. Ә гитараға килгәндә... Ул бөгөн йәш кеше ҡулында йышыраҡ күренә, уның дуҫына, моң серҙәшенә әүерелә. Шуға ла "Ҡош юлы" йәштәр араһында хуплау тапты.

### Сиктәрҙән азат булды

Һүҙ, моң азатлығы булғанда, социаль әһәмиәт килеп сыға һәм, киреһенсә, битарафлыҡҡа урын ҡалмай. Ваҡыты-ваҡыты менән йәштәрҙе битарафлыҡта ғәйепләү һүҙҙәре ишетелеп ҡала. Йәш быуын, бәлки, ғәмһеҙерәктер, әммә бер ҡасан, бер тарихи осорҙа ла ул битараф булмаған. Тарихи үҫештә төп көстө һәр ваҡыт йәштәр үҙ иңенә алып торған.

Әлеге фестиваль ниндәйҙер күрһәтмә, контролдән, сиктәрҙән азат булды. Стиль, жанр, тематика йәһәтенән кемгә ниндәй йыр оҡшай, шуны башҡарҙы. Ошо йырҙарға ҡарап, бөгөнгө башҡорт йәштәренең донъяға ҡарашын, фекерен, күңелен белеп булды. Гитарала төрлө йырҙарҙы башҡарырға була. Әммә уның яңғырашына, моңона азатлыҡ рухы менән һуғарылған, йәғни рок, бард йүнәлешендәге йырҙар үтә лә ауаздаш. Шуға күрә, кем гитарала уйнай, ул күңеле менән азат шәхес, тип әйтергә була. Фестивалдә ҡатнашыусыларҙың күбеһе үткән быуаттың 90-сы йылдарында һәм хәҙерге көндә танылыу алған башҡорт рок йырҙарын һайланы. Үҙ ижады менән сығыш яһаған ҡатнашыусыларға айырым номинация булдырылды. Сөнки фестивалдең маҡсаты - башҡорт музыкаһында бард сәнғәтен үҫтереү.

### Ситтәгеләр мөнәсәбәте

"Ҡош юлы" фестивале тураһында хәбәр ителгәс тә, башҡорт барды бармы, булғанмы, кәрәкме-юҡмы, тигән һорау яуҙыра башланылар. Был, башҡорт операһы һәм симфонияһы йәки башҡорт повесы, романы һәм сонеты бармы, кәрәкме, тигән һымағыраҡ яңғырай. Бард жанры күптән милли сиктәрҙән алыҫ тора. Улай ғына түгел, ул күп кенә музыка йүнәлештәре менән синтезға инә. Эш стилдә, жанрҙа түгел, йырҙың эске йөкмәткеһе мөһим. Ҡайһы бер эстрада йырҙарын да бард жанрына яраҡлаштырып йырларға була. Мәҫәлән, Рим Хәсәновтың байтаҡ йырҙарын стиле буйынса тап бард жанрына индерергә булыр ине. Бард йырҙары бар беҙҙә, тик бардтар үҙҙәре күҙгә күренеп бармай. Йәғни бард йырҙарын башҡарыу мәҙәниәтен үҫтерәһе бар әле.

Был йәһәттән бер мөһим, бәлки, сәйәси кимәлдәге проблема күҙ уңынан ысҡынып бара. "Ҡош юлы" - республикабыҙҙа үткән берҙәнбер фестиваль түгел. Йыл һайын Башҡортостандың бер нисә төбәгендә бындай саралар үтеп тора. Тик унда нигеҙҙә ситтән, Мәскәүҙән һәм башҡа өлкәләрҙән килгән йырсылар йыйыла. Башҡорт ижадсылары унда ҡатнашмай. Ҡатнашырға теләмәгәндән түгел. Ситтән килгән ойоштороусылар уларҙы ҡатнаштырыуҙан хатта баш тарта. Мәҫәлән, Өфөлә Ағиҙел буйында уҙған бард фестивалендә башҡортса йырлаған егеткә сығыш яһарға рөхсәт бирмәгәндәрен ишетеп беләбеҙ. Улай булғас, ниңә ойошторола һуң республикала ундай фестивалдәр? Бары тик мәскәүҙәрҙең күңелен күрер өсөн генәме? Ә шул уҡ ваҡытта "Ҡош юлы" хаҡында белеп ҡалғас, ҡайһы берәүҙәр, ниңә был фестивалде башҡортса ғына ойошторағыҙ, беҙҙе лә ҡатнаштырығыҙ, тип дәғүә белдерә. "Ҡош юлы"башҡортса ғына яңғырарға тейеш икәнен әлеге фестиваль иҫбатланы инде. Уға артабан да ҡанатлы яҙмыш теләргә генә ҡала.

**ШУЛАЙ ИТЕП...**

**Киләсәктә "Ҡош юлы" тик бард стиле менән генә сикләнеп ҡалмаһын, тәүге фестивалдең йүнәлеше һаҡланһын тигән теләк бар. Унда романтик йырҙар ҙа, рок стиленә яҡын булған социаль киҫкенлекте сағылдырыусы ижад өлгөләре лә булһын. Ул ваҡытта "Ҡош юлы"ның төп маҡсаты - башҡорт йәштәрен азатлыҡ рухында тәрбиәләү үҙ емешен бирер.**

**Мөнир ИҠСАНОВ.**

ИНТЕРНЕТТАН



# ХӘРӘКӘТ ЮҠЛЫҠҠА...

## цивилизация "ғәйепле"

■ Лондондағы Импер коллежды хеҙмәткәрҙәре үткәргән тикшеренеүҙәр күрһәтеүенсә, шоколадта йүткереүҙе баҫыу һәләтенә эйә булған матдә - теобромин барлығы асыҡланған. Шуға ла һыуыҡ тейгәндә шоколад ашау файҙалы. Был татлы аҙыҡтың ыңғай яғы был ғына түгел. Шоколад тирене ҡояш нурҙарынан һаҡлай һәм йөрәк, ҡан-тамырҙары торошон яҡшырта.

■ Америка ғалимдары белдереүенсә, даими рәүештә ҡыҙыл сөгөлдөр йәки сөгөлдөр һуты ҡулланыу мейе эшмәкәрлеген, шулай уҡ ҡан әйләнешен һәм ҡан тамырҙары торошон яҡшырта. Составында һаулыҡ өсөн файҙалы матдәләре булған өсөн был йәшелсәне диетологтар ҙа юғары баһалай. Ул аш һеңдереүгә ыңғай йоғонто яһай, организмды витаминдар менән байыта. Сөгөлдөрҙән тыш, сельдерей, кәбеҫтә, йәшел салат та ҡан әйләнешенә файҙалы.

■ Көлөү кәйефте күтәреп кенә ҡалмай, сәләмәтлекте лә яҡшырта, тип белдерә Һиндостандың Indraprastha Apollo дауаханаһы белгестәре. Тикшереү барышында асыҡланыуынса, көлөү йөрәк һәм үпкәләр өсөн яҡшы күнекмә булып тора, был ваҡытта йөрәк тибеше йышая, мейе ял итә. Ғалимдар әйтеүенсә, көлөү стрестан һаҡлаусы яҡшы сара ла. Тик бының өсөн ауыҙҙы асып, рәхәтләнеп көлөргә кәрәк. Ғалимдар иҫәпләүенсә, хәҙерге заман кешеһе көнөнә дөйөм 6 минут тирәһе көлә.

■ Белгестәр әйтеүенсә, тап цивилизация ҡаҙаныштары кешегә ҙур зыян килтерә. Бөгөнгө кешенең тормошонда гигиена ла, комфорт та бар, әммә сәләмәт булыу өсөн иң кәрәклеһе булған хәрәкәт юҡ. Хатта балалар ҙа хәрәкәтле уйындарға ҡарағанда компьютер уйындарын хуп күрә. Бөтөн донъя һаулыҡ һаҡлау ойошмаһы (ВОЗ) үткәргән тикшеренеүҙәрҙән күренеүенсә, Евросоюз илдәрендәге бөтә үлемдәрҙең 10 проценты - аҙ хәрәкәтләнеүҙән. Бындай хәл бөгөн күп илдәрҙә күҙәтелә. Кеше көндәлек тормошонда ни тиклем заманса ҡоролмаларҙы күберәк һәм йышыраҡ ҡуллана, шул тиклем аҙыраҡ хәрәкәт итә. Бындай шарттарҙа әгәр ҙә кеше  үҙенә-үҙе ярҙам итмәһә, фән дә, медицина ла ярҙам итмәйәсәк, ти белгестәр.

■ Компьютер артында оҙаҡ эшләргә тура килһә, иң тәүҙә күҙҙәргә мөмкин тиклем әҙерәк зарар килтереүҙе хәстәрләргә кәрәк. Америка ғалимдары күҙҙәр өсөн иң зыянһыҙ компьютер шрифтын асыҡлаған. Эксперименттар күрһәтеүенсә, иң хәүефһеҙ шрифт тип Verdana асыҡланған. Хәрефтәрҙең иң оптималь варианты тип 10-12 пункт билдәләнгән. Белгестәр әйтеүенсә, Verdana шрифтында хәрефтәр аҫтан һәм өҫтән график штрихтар менән билдәләнмәй, шуға ла күҙҙәр аҙыраҡ арый. Табиптар шулай уҡ мониторға күҙҙәрҙе ҡыҫып ҡарамаҫҡа кәңәш итә.

■ Төрлө тәжрибәләр үткәреп ҡарағандан һуң, уң ҡулы менән генә түгел, һул ҡулы менән дә яҙа белгән кешеләргә тәьҫир итеүе еңелерәк, тип белдерә психологтар. Нью-Джерсила урынлашҡан Монклер дәүләт университеты ғалимы Рут Проппер шундай тикшеренеү үткәргән. Беренсе төркөмгә ике ҡулы менән дә, икенсеһенә уң ҡул менән генә яҙа алыусылар йыйылған. Һынауҙар барышында уларҙың барыһы ла йә күңелле, йә ҡыҙғаныс, йә хәүефле берәй ваҡиға тураһында уйлаған. Был ваҡытта лабораторияла классик музыка уйнатҡандар. Кем ике ҡулы менән яҙа белә, шулар ғалимдар ҡушҡан тойғоларға тиҙерәк бирелгән. Белгестәр аңлатыуынса, бындай кешеләрҙең уң һәм һул мейе ярымшарҙарын бәйләп тороусы нервы туҡымалары нығыраҡ үҫешә. Был уларҙың эмоциональ әүҙемлеге һәм ситтәрҙең тәьҫиренә тиҙерәк бирелеүен аңлата.

ҮҘ ӨЙӨМДӘ - ҮҘ КӨЙӨМ

**"Ауылда йәшәүе күңелһеҙ... Аҡса ла юҡ, эш тә. Көндө нисек үткәрергә белеп тә булмай..." Йәш ҡатындарҙың ошондай зар һүҙҙәрен ишеткән һайын, матур тәбиғәт ҡосағына һыйынып ултырған Баймаҡ районы Байым ауылында йәшәгән уңған апай-инәйҙәр күҙ алдыма килә. Уларҙың хужабикәләр түңәрәген ойоштороп, бергә йыйылып,  баҡсасылыҡ, ҡул эштәре, өй эштәрен алып барыу, бала тәрбиәләү һ.б. серҙәре менән уртаҡлашыуын Таңһылыу Әхмәтхан ҡыҙы Вәлиеванан бер нисә йыл элек үк ишеткәйнем. Көндәр йылынып, тупраҡ "бешеү" менән Байым хужабикәләренең бар иғтибарын емеш-еләк, йәшелсә, гөл-сәскә үҫтереүгә йүнәлтеүен ишетеп, уларға юл алдым.**

# АУЫЛДА КҮҢЕЛҺЕҘ ТҮГЕЛ,

## егәрлегә шөғөлө лә күп

Ғүмеренең һәр минутын ҡәҙерләй белгән апай-инәйҙәр Таңһылыу апай Вәлиеваның өйөнә йыйылған булып сыҡты. Өҫтәлдә үҙҙәре бешергән һый-ниғмәттәр, һуттар теҙелгән. Хужабикәләр һыйланып ҡына ултырмай, ә бер-береһе менән тәмлекәстәр бешереү серҙәрҙе менән дә уртаҡлашып өлгөрә. Унан Таңһылыу апай баянын һуҙыу менән ҡушылып йырлап, таҡмаҡтар ҙа әйтеп алалар.

Байымдың уңғанбикәләре әйтеүенсә, улар баҡса миҙгеленә ҡыштан әҙерләнә башлаған. Һәр кем төрлө йәшелсә, сәскә ултыртҡан. Хәҙер инде улар үҫентеләре менән уртаҡлаша. Кемдер күберәк сәскә ултыртырға тырыша, икенселәре иһә емеш-еләк ҡыуаҡтарына өҫтөнлөк бирә.

Төрлө йәштәге ҡатын-ҡыҙҙарҙың һүҙҙәре берегеүенә, бер-береһенә ихтирамлы, иғтибарлы булыуына ла һоҡланып туйғыһыҙ. Йәш килендәр ауылдың абруйлы ағинәйҙәре Рәйсә Зарипова, Әлмира Ғәлина, Ишбикә Исмәғилева, Менәүәрә Үлмәҫбаева, Рәшиҙә Ғәлина, Рәйфә Рамазанова, Рәсимә Зарипова, Әлифә Баййегетованың һәр һүҙен йотлоғоп тыңлай.

"Килен кешенең ярты бәхетенең күбеһе ҡәйнәнән бит ул. Бына беҙҙең ауылға сит яҡтан бер ҡыҙ килен булып төшкәйне. Улар һалманы туҡмаслап, нәҙек итеп ҡырҡа икән. Ҡәйнәһе: "Бындай һалма булмай, шаҡмаҡлап ҡырҡ!"- тип бойорғас, йәш килен һәр шаҡмаҡты айырым ҡырҡып сыҡҡан, ти..." Инәйҙәрҙең хәтирәһенә барыһы ла рәхәтләнеп көлөп алһа ла, сит-ят тарафтан, икенсе йорттан килгән ҡыҙ баланы һаҡлау, уға ерегергә ярҙам итеү йәш ғаиләнең киләсәген билдәләүен һәр кем һыҙыҡ өҫтөнә алды.

Байымдар йәшәйеше яғынан өлгө булған гүзәл ханымдары менән хаҡлы рәүештә ғорурлана. Почтальон булып эшләгән Таңсулпан Ғайсина тураһында: "Егәрле булыуына һоҡланып бөтә алмайбыҙ. Барыһына ла өлгөрә, һәр саҡ матур, яғымлы итеп һөйләшә. Уға йомош менән барып, өйөнә күпме бысраҡ ташып бөтәбеҙ, барыбер үҙе кеүек йорто ла нур сәсеп тора", - тинеләр.

Түбә ҡасабаһынан килен булып төшөүенә өс тиҫтә йылдан ашыу ваҡыт үткән Зөлфиә Рахманғолова, дүрт бала әсәһе Гөлшат Хисаметдинова, иптәше вафат булғас яңғыҙы балаларын аяҡҡа баҫтырған Рәсимә Әлмөхәмәтова, ололарҙың терәктаянысына әүерелгән социаль хеҙмәткәр Рәйлә Ғәлина, килене Рәзилә менән "Сабыр ҡәйнәләр, уңған килендәр" конкурсында уңышлы сығыш яһаған Мансура Йылҡыбаева менән аралашыу, һөйләшеү күп күренешкә яңы ҡараш бүләк итте, донъяның матур яҡтарын асты.

Таңһылыу апай Вәлиева: "Әлбиттә, бар илде ялмап алған эскелек афәте беҙҙең бәләкәй ауылды ла урап үтмәне. Бер нисә эскән ҡатын бар. Беҙ уларҙы ошондай түңәрәктәргә йәлеп итергә тырышабыҙ, әммә әлегә һөҙөмтәһе юҡ. Шулай ҙа ауылыбыҙҙа уңған, аҡыллы, һәр яҡтан матур ханымдар ғына түгел, ирегеттәр ҙә бихисап. Тормош юлдашы бәпәй тапҡанда мәрхүмә булып ҡалғас, Фәрит Рамазанов сабыйын етем итмәй, яңғыҙы аяҡҡа баҫтырҙы. Ҡайғыға һылтанып, ҡул ҡаушырып йәки эсеп йөрөмәне, бар һөйөүен бәпесенә йүнәлтте. Сәғит Юлмөхәмәтов балдыҙы үкһеҙ етем ҡалғас, тормош юлдашы менән уны үҙ балаларылай күреп тәрбиәләйҙәр. Шулай уҡ йәш килендәр, ҡыҙҙарыбыҙ ҡыуандыра. Мәҫәлән, Икенсе Этҡолдан килен булып төшкән, дүрт бала әсәһе Рәзинә Ҡаҙаҡбаеваның таң менән бар керҙәрен-иҙәнен йыуып сығыуына һоҡланып бөтә алмайбыҙ. Шулай уҡ Айһылыу Әбдрахманова, Розалия Йылҡыбаева, Илүзә Юлмөхәмәтова, Вәлимә Хәлитова, Зилә Вәлиева ҡул эштәренә оҫта булыуы, уңғанлығы менән айырылып тора",- тине.

Үҫентеләр, орлоҡтар алмаштырырға килгән ҡатын-ҡыҙҙар кейәүгә сығырға йыйынған йәш ҡыҙ менән бирнә әҙерләү, икмәк бешереү, ҡаҙ майын иретеп алыу, бала бағыу серҙәре менән дә уртаҡлашты. Абруйлы ағинәйҙәр йәш ҡатындарға: "Өйөгөҙ, үҙегеҙ йыйнаҡ, матур булһағыҙ, йортоғоҙҙан тәмле аш еҫе аңҡыһа, ирҙәрегеҙ ҙә ситкә ҡарамаҫ, үҙегеҙҙе ҡәҙер-хөрмәт итерҙәр", - тип ҡуйҙы.

Эйе, йыл һайын баҙҙарын йәшелсә менән тултырған, ҡыштарын ҡаҙ өмәләрен гөрләтеп үткәргән, ҡул эштәре күҙҙең яуын алған Байым хужабикәләре күптәргә үрнәк ул. Уларҙың күбеһе Баймаҡта һөт-ҡаймаҡ, май һ.б. һатып, ғаилә бюджетын тулыландыра. Хәҙер Байым хужабикәләре дарыу үләндәре әҙерләү менән мәшғүл. Артабан тәмле ҡайнатмалар, унан турамалар мәле етә. Шул уҡ ваҡытта ҡыштан хәстәрләй башлаған баҡсалар көндән-көн яңы күҙен асҡан гөл-сәскәһе менән һушты ала. Шунан һуң нисек ауылда йәшәүе күңелһеҙ булһын инде? Күрәһең, унда ялҡауҙарға ғына урын тарҙыр ул. Ә Байымдың уңғанбикәләренә киләсәктә лә баҡсаларының мул уңышлы булыуын һәм күңел хазиналарын һаҡлап ҡалыуҙарын теләйбеҙ.

**Гүзәл ИҪӘНГИЛДИНА.**



Байым уңғанбикәләре.

*МОСОЛМАН ӘҘӘБЕ*

## ХОҘАЙ МЕНӘН ӘҢГӘМӘЛӘШ

Хоҙай Тәғәлә бер ваҡыт Мусанан (ғәләйһи үә сәлләм): "Ҡулыңда нимә?" - тип һорай. Бәйғәмбәр аңлата башлай: "Был минең таяғым. Мин уға таянам, уның менән малға аҙыҡ йыям, ағастан япраҡтар һуғып төшөрәм". Муса бәйғәмбәр (ғәләйһи үә сәлләм) Аллаһы Тәғәләгә был һорауҙың яуабы мәғлүм булыуын белһә лә, уға бөтәһен дә ентекле итеп һөйләп бирә. Ни өсөн? Кеше яратҡаны, яҡыны менән бергә булғанда унан тиҙ генә айырылғыһы килмәй. Уның менән әңгәмәне оҙаҡҡараҡ һуҙыр өсөн яңынан-яңы темалар уйлап таба, шул саҡта үҙен яратҡандарын да тоя ала.

Хоҙай Тәғәлә менән дә беҙ шундай әңгәмәгә мохтажбыҙ. Доға ҡылыу Аллаһы Тәғәлә менән Бәйғәмбәрҙең әлеге һөйләшеүе һымаҡ ул. Доға - кеше һәм Аллаһ араһында ҡоролған әңгәмә. Унда тыйылған темалар юҡ. Кеше Хоҙай менән бөтә нәмә тураһында - көндәлек тормош, ваҡ мәсьәләләр тураһында ла, мәңгелек хаҡында ла һөйләшә ала. Ихлас мөъмин өсөн доғалары ҡабул булыуҙан бигерәк, Хоҙайға доға ҡылыу, Уға мөрәжәғәт итеү мөмкинлеге булыуы мөһим.



## ТЕЛӘГЕҢ АНЫҠ ҺӘМ ҘУР БУЛҺЫН

Әбү Хөрәйрә (радиаллаху анху) Бәйғәмбәрҙең (саллаллаһу ғәләйһи үә сәлләм) бер хәҙисен еткергән: "Кем дә кем Хоҙайға мөрәжәғәт итә, былай тип әйтмәһен: "Эй, Хоҙайым, әгәр ҙә теләһәң, мине ғәфү ит, әгәр ҙә теләһәң, изгелегеңде ебәр". Доға ҡылыусы үҙ үтенесен һәм теләген асыҡ, аңлайышлы һүҙҙәр менән белдерһен".

Мөслим йыйынтығында был хәҙискә өҫтәмә аңлатмалар бар. Бәйғәмбәр (саллаллаһу ғәләйһи үә сәлләм) әйткән: "Кеше үҙ теләгенең маҡсатын уйлап, аныҡ, асыҡ һәм ышаныслы итеп әйтһен. Үтенесе ҙур булһын. Сөнки Аллаһ төшөргән бүләктәрҙең береһе лә Уның өсөн ҙур, бөйөк һаналмай". Был хәҙистәрҙән аңлашылыуынса, доға ихлас һәм аныҡ теләк менән ҡылынырға тейеш, сөнки Аллаһ мөъминдең һәр һорауын үтәй ала. Иманлы кеше Аллаһҡа "әгәр теләһәң" тигән шарт ҡуйырға тейеш түгел. Доға ҡылғанда, Хоҙай Тәғәлә минең үтенестәргә яуап бирәсәк һәм изгелеген күрһәтәсәк, тигән ныҡлы ышаныс булырға тейеш.

*МӨҒЖИЗӘЛӘР ЗАМАНЫ*



# КОСМОЭНЕРГЕТИКА ҺӘМ СӘЛӘМӘТЛЕК

### Аҡсаны нисек һаҡларға һәм арттырырға?

**Кем ысынлап та рухи һәм физик яҡтан сәләмәт булырға теләй, уларға аҡсаны һаҡлау һәм уны арттырыуҙың ябай ҡағиҙәләре менән танышырға тәҡдим итәм:**

1. Һеҙ үҙегеҙҙе бай булырға лайыҡлы тип тойорға тейешһегеҙ!
2. Аҡсаны яратырға кәрәк, ул саҡта ул да һеҙҙе яратыр!
3. Аҡса янсығы матур, сағыу төҫтә һәм аҡса оҙонлоғонда булырға тейеш.
4. Янсыҡта аҡса купюралар ҙурлығы буйынса рәтләп ятһын һәм улар артып ята тип күҙаллағыҙ.
5. "Аҡсам юҡ", тип әйтергә ярамай, ул саҡта ысынлап та аҡсағыҙ булмаясаҡ, сөнки үҙегеҙҙе юҡлыҡҡа программалайһығыҙ. Иң яҡшыһы: "Ирекле әйләнештә йөрөгән аҡсам юҡ", - тиергә кәрәк.
6. Аҡсаны бөтәрләргә ярамай.
7. Һуңғы тингә ҡәҙәр сарыф итергә ярамай - аҡса аҡсаны тарта.
8. Ҡунаҡҡа буш ҡул менән йөрөргә ярамай.
9. Аҡсаға "Юҡ" тиергә, унан баш тартырға ярамай. Әгәр хеҙмәтегеҙ өсөн (бала ҡарап ултырҙығыҙмы, кемделер ҡайҙалыр юл ыңғайы ултыртып алып барҙығыҙмы) аҡса тәҡдим итәләр икән - алырға кәрәк.
10. Аҡсаны "ойоҡта" һаҡларға ярамай (энергия ирекле ағып торорға тейеш).
11. Аҡса туҙҙырҙым, тиергә ярамай, "түләнем" тиергә кәрәк.
12. Сит аҡсаларҙы алырға ярамай. Үҙегеҙҙекен, хатта бер тин төшөп китһә лә, мотлаҡ алырға кәрәк.
13. Бурысҡа күпме йәл түгел, шунса бирергә кәрәк (уны кире ҡайтармаясаҡтар, тип иҫәпләгеҙ, әгәр ул кешегә аҡса биреү урынлы булһа, Аллаһы Тәғәлә уға үҙе бирер ине). Әгәр, аҡсаны ҡайтарманылар, тип борсолһағыҙ, бары тик энергияғыҙҙы ғына әрәм итәсәкһегеҙ.
14. Бурысҡа бирһәгеҙ, мотлаҡ кире ҡайтарыу ваҡытын билдәләгеҙ һәм шул ваҡытта ҡайтарып биреүҙәрен талап итегеҙ. Әгәр ҡайтармайҙар икән, борсолмағыҙ, донъя гармониялы һәм ғәҙел. Аҡсағыҙҙы ҡайтармаһалар, бурыслы кешенең аҡса ағымы һеҙгә күсереләсәк. Һәм һеҙ, бурыслы кеше һеҙҙең менән тулыһынса иҫәпләшмәй тороп, ошо ағымда буласаҡһығыҙ (ләкин был белем менән зыян килтермәгеҙ - ваҡытында бурыс ҡайтарыуҙарын талап итегеҙ).
15. Бурысҡа аҡсаны уларҙы арттырыу өсөн генә (эшҡыуарлыҡ) алырға мөмкин, ә зиннәтле предметтар алыу өсөн түгел (юрғаныңа ҡарап аяҡ һуҙыу зарур).
16. Баҙарҙа һатыулашырға кәрәк (аҡса үҙен яратыусыларҙы ғына баһалай), әммә шаштырып та ебәрмәгеҙ. Әгәр кемдер үҙе етештергән продукцияны һата икән (картуф, ҡаймаҡ һ.б.) - һатыулашмағыҙ.
17. Аҡсаны аҡыл менән тотоноғоҙ (беҙ алған 90 процент әйберҙең кәрәге юҡ). Тимәк, ни тиклем аҡса күп, шул тиклем кәрәкмәгән әйберҙе күберәк һатып алабыҙ.
18. Килемегеҙҙең ундан бер өлөшөн (килемдән сығымдарҙы алғандан һуң ҡалған өлөш) мохтаждарға, тәү сиратта, эргәгеҙҙәгеләргә бирегеҙ, әммә бер кемде лә елкәгеҙгә ултыртмағыҙ.
19. Матди юғалтыуҙар менән еңел хушлашығыҙ (ундан бер өлөш бирҙем тип уйлағыҙ).
20. Чектарҙы, квитанцияларҙы (фатир өсөн түләү, сығымдар һ.б.) шатлыҡ хисе менән түләгеҙ - алған хеҙмәтегеҙ өсөн рәхмәтле булығыҙ!
21. Ялланып эшләһәгеҙ, мотлаҡ алдан уҡ аласаҡ суммағыҙҙы билдәләгеҙ һәм аванс алырға тырышығыҙ (эште тамамлағас, уның хаҡы күпкә осһоҙлана).
22. Әгәр эшкә яллаһағыҙ, аванс бирегеҙ, ә иҫәп-хисапты эш тамамланғас, уның сифатын тикшергәс, яһарһығыҙ.
23. Теләһә ниндәй финанс, матди операциялар үҙ файҙаңа, үҙ мәнфәғәтең өсөн булырға тейеш, әммә башҡаларға зыян итеп түгел.
24. Үҙегеҙҙе финанс яғынан тәьмин ителгән һәм аҡсағыҙ күп икән тип күҙаллағыҙ.
25. Конкуренттарығыҙға алтын ямғыры яуа тип күҙ алдына килтерегеҙ. Башҡаларҙың етеш йәшәгәненә ҡыуанығыҙ.
26. Аҡса алған һайын ҡыуанығыҙ (эш хаҡы, премия, бурыс ҡайтарҙылар һ.б.).
27. Башҡаларҙың аҡсаһын һанамағыҙ (үҙегеҙҙең аҡса ағымын уларҙың аҡсаһына күсерәһегеҙ), һәр кем күпмегә лайыҡ, шунса ала.
28. Аҡсаны ҡулға бирмәгеҙ, улар энергияны кәүҙәләндерә һәм ҡул аша һеҙ үҙегеҙҙең энергияғыҙҙы ла бирәһегеҙ.
29. Аҡсаны кисен һанамағыҙ.
30. Йыш ҡына юғары килем менән ымһындыралар, татлы тел менән баш бутайҙар, шул уҡ ваҡытта алдайҙар (пирамидалар) - танышмы? Алданмағыҙ. Бушлай сыр бары тик ситлектә генә була.
31. Иҫегеҙҙә тотоғоҙ: миллионерҙарҙың сере шунда, улар бер ваҡытта ла алдашмай (тимәк, уларҙы ла алдамайҙар). Әгәр саҡ ҡына, тиндәрҙә лә алдашһаң, тормош үҙе һине даими алдап торасаҡ.
32. Ниндәйҙер ағастан башыңа алма килеп төшөүен көтөргә ярамай. Тәүҙә ошо алма ағасын ултыртырға, иң яҡшыһы - тотош баҡса ултыртырға кәрәк.
33. Ниндәйҙер эштең килеп сығырмы, юҡмы икәнен көтөп ятырға түгел, ә бер юлы биш йүнәлештә (беҙҙең биш бармағыбыҙ бар) эшләргә кәрәк. Иҫегеҙҙән сығармағыҙ: Аллаһы Тәғәлә донъяны бай итеп яралтҡан!

**Бер орлоҡ сәсегеҙ - 100 орлоҡ алырһығыҙ; бер тапҡыр ағас ултыртығыҙ - һәр йыл уңыш алырһығыҙ; быуаға карп ебәрегеҙ - меңдәрсә ыуылдырыҡ алырһығыҙ! Байлыҡ һәм муллыҡ ҡанунын ҡабул итергә һәм шуға ярашлы йәшәй башларға кәрәк!**

**Рауфан МОРТАЗИН.**

*УҢЫШ ҠАҘАН*



# ЫСЫН ТОРМОШҠА СӘЙӘХӘТ

## Ыңғай маҡсаттар кәрәк

**1960 йылдар башында тикшеренеүселәр һәр кешенең мейеһенә уңыш механизмы һалынған, тигән һығымтаға килә. Был "ҡоролма" ижади фекерләү менән бер мисәүҙә эшләй һәм даими туҡландырып тороуға мохтаж. Йәғни уға даими рәүештә ыңғай маҡсаттар кәрәк. Тимәк, маҡсаттар ҡуйыуҙы семинарҙан башлайыҡ.**

**1-се этап. Тормош уңышының генераль план-графигы**. Үҙегеҙҙең тормош мәғәнәһен нисек аңлауығыҙҙы формалаштырығыҙ һәм уны ҡағыҙға яҙығыҙ. Ул ҡыҫҡа һәм тос булһын. Һеҙҙең тормош мәғәнәһе тураһындағы резюмығыҙ был тормошта нимәгә өлгәшергә теләйһегеҙ һәм кешеләрҙең хәтерендә нисек булып ҡалғығыҙ килә - шуның асылы булырға тейеш. Ул - һеҙ тормошта ҡулланырға теләгән ҡиммәттәр һәм өлгәшергә теләгән төп маҡсаттарҙың берлеге. Тормош уңышын күҙаллауығыҙ тормош маяғы булып торасаҡ. Ул һеҙгә яҡшы ваҡытта ла, насар ваҡытта ла юл күрһәтеп, иғтибар тупларға, хыялығыҙға табан алға ышаныслы барырға юл күрһәтәсәк. Мәҫәлән, уның шулай төҙөлөүе мөмкин: *минең тормоштағы маҡсатым көслө характерлы һәм бөтөн шәхес булыуҙан, илемә файҙа килтереүҙән, физик сәләмәтлеккә һәм йән тыныслығына өлгәшеүҙән ғибәрәт. Минең матур ғаиләм, яратҡан эшем буласаҡ. Ул миңә имен тормош тәьмин итәсәк. Мин һәр кем менән яҡшы мөнәсәбәттә буласаҡмын һәм тормошомдо ҙур энтузиазм, шатлыҡ менән үткәрәсәкмен.*

Бына һеҙгә юл күрһәтеүсе фонарь, тормошоғоҙҙа ҡайҙа барыуығыҙҙы билдәләүсе юл. Был план-график һеҙҙе башҡалар тура юлдан ситкә алып китергә тырышҡанда ла йәки юлығыҙҙа ҡаршылыҡтар осрағанда ла компас булып торасаҡ. Был ҡағыҙҙы һәр саҡ күҙ алдығыҙҙа булһын өсөн күренеп торған урынға элегеҙ һәм көн һайын кәм тигәндә ике тапҡыр уҡығыҙ.

**2-се этап. Камиллыҡҡа өлгәшеүҙең шәхси маҡсаттары.** Хәҙер, тормош ахырында ҡайҙа булырға теләүегеҙҙе белгәс, деталдәрҙе ҡарайыҡ. Әйҙәгеҙ, шәхси үҫештең бер, биш, ун йылға планын ҡарайыҡ. Үҙегеҙҙә ниндәй сифаттарҙы үҫтерергә, ниндәй стартегияға эйә булырға, ниндәй булырға, үҙегеҙҙе нисек тойорға, нисек фекерләргә, ниндәй интеллектҡа һәм хәтергә эйә булырға, ниндәй китаптар уҡырға, ниндәй яҙмалар тыңларға, ниндәй сараларға йөрөргә теләйһегеҙ - быларҙың барыһын да ҡағыҙға яҙығыҙ, ошо эштәрҙе эшләү ваҡытын билдәләгеҙ.

**Өйгә эш: быйыл камиллыҡҡа өлгәшеүҙең 10 төп маҡсаты һәм уларҙы үтәү планын яҙығыҙ. Шундай уҡ планды яҡындағы биш, ун йыл өсөн дә төҙөгөҙ.**

**Робин ШАРМА.**



## 25 ИЮНЯ
## ПОНЕДЕЛЬНИК
### ПЕРВЫЙ КАНАЛ
05.00 «Доброе утро»
09.00 Новости
09.05 «Контрольная закупка»
09.40 «Женский журнал»
09.50 «Жить здорово!»
10.55 «Модный приговор»
12.00 Новости (с субтитрами)
12.25 "Женский доктор". Сериал
13.20 "Фазенда"
14.00 Другие новости
14.25 «Понять. Простить»
15.00 Новости (с субтитрами)
15.20 "ЖКХ"
16.15 "Хочу знать"
17.00 «Жди меня"
18.00 "Вечерние новости"
18.25 "Между нами, девочками"
19.00 «Давай поженимся!»
20.00 «Пусть говорят»
21.00 «Время»
21.30 «Зоя». Сериал
22.30 "Первый класс"
23.30 "Вечерний Ургант"
00.00 "Познер"
01.00 Ночные новости
23.40 "С ног на голову"
01.20, 03.05 "Все или ничего". Мелодрама
03.00 Новости
03.30 "Повелитель пластилиновых ворон Александр Татарский"

### РОССИЯ 1
05.00, 06.10, 06.41, 07.10, 07.41, 08.08, 08.36 "Доброе утро, Россия!"
06.07, 06.35, 07.07, 07.35, 08.05, 08.30 "Вести — Башкортостан"
09.00 "С новым домом!"
09.45 "О самом главном"
11.00 "Вести"
11.30 "Вести — Башкортостан"
11.50 "Тайны следствия". Сериал
12.50 "Люблю, не могу!"
13.50 "Вести. Дежурная часть"
14.00 «Вести»
14.30 «Вести — Башкортостан»
